ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 октябрь (карасай) 2024

№40 (1133)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Йота" алғансы...



2

Һыу юлы ҡапҡаһы был!



6

Ҡалалы башҡорттар,

йәки Тарихи сығанаҡтар аша асылған хәҡиҡәт



8-9

Республика иртәһе иртәгәгә илтә

(Эссе)



12-13

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 4 октябрҙән 14-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 835 һум 44 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*АФАРИН!*

# СИГЕҮ СИГӘ ҠЫҘҘАР...

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "Сигелгән Башҡортостан" Республика фестивале уҙғарылды. Сара 2023 йылда Башҡортостан Башлығы Грантына бойомға ашырылған "Башҡортостандың сигелгән картаһы" Республика проектының дауамы булып тора.**



Сараны БР Мәҙәниәт министрлығы һәм БР Милли музейы ярҙамында Республика халыҡ ижады үҙәге ойошторҙо. Ул семинар һәм практик өлөштәрҙән тороп, 9-10 октябрҙә Өфөлә, Милли музейҙа үтте. Семинарҙарҙа оҫталарҙы һәм ҡул эшен яратыусыларҙы сигеүҙә ҡулланылған орнаменттар һәм символдар донъяһы менән таныштырҙылар, уларҙың мәғәнәһен аңлап ҡулланырға өйрәттеләр, ә практик өлөшөндә сигеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо.

Фестивалдә республиканың 56 муниципаль берәмегенән 80-дән ашыу оҫтабикә ҡатнашты, уларҙы сараның тантаналы өлөшөндә Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Салауат Кирәйев сәләмләне. Артабан ҡатнашыусылар техник фәндәр кандидаты, "Ағиҙел" Башҡорт художестволы кәсептәренең мәҙәни мираҫты һаҡлау бүлеге начальнигы Айгөл Камалиеваның "Милли мәҙәниәттең тамға-символ теле булараҡ орнамент" темаһына арналған сығышын диҡҡәт менән тыңланы. Шулай уҡ культурология кандидаты, халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты Гөлнара Тажетдинова "Бренд булдырыу. Проектҡа тиклем идеялар (кейем һәм аксессуарҙарҙы стилләштереүҙә традицион семәр)" темаһына лекция һөйләне һәм кейем брендын булдырыу тәжрибәһе менән бүлеште. Ул шулай уҡ башҡорттарҙың иҫәпләп сигеү нигеҙҙәре буйынса оҫталыҡ дәресе лә үткәрҙе.

Фестивалдең беренсе көнө шулай файҙалы әңгәмәләргә бай булһа, икенсе көнөндә республиканың төрлө төбәктәренән йыйылған оҫтабикәләр үҙ-ара белем һәм тәжрибә уртаҡлашты. Музей майҙансығында Межгорье, Сибай ҡалаларынан, Әлшәй, Балаҡатай, Дүртөйлө, Йылайыр, Иглин, Краснокама, Хәйбулла районларынан оҫталар эшләне. Бынан тыш, Милли музей күргәҙмәләренә ҡуйылған сигелгән әйберҙәр менән дә танышыу мөмкинлеге бирелде.

"Сигеү - үҙендә кешелек, халыҡтар, уларҙың мәҙәниәте һәм йолалары тураһында тарих һаҡлаған үҙенсәлекле ҡул эше сәнғәте. Нағыш борондан мөһим функциялар атҡарған - ҡурсалаған, һаҡлаған, именлеккә, сәскә атыуға һәм яҡшылыҡҡа булышлыҡ иткән. Оҫтабикәләр сиккән әйберҙәр уларҙың ҡул йылыһын, изге ниәттәрен үҙендә һаҡлай. Нәҡ шунлыҡтан нағышлы әйберҙәрҙән матурлыҡ, энергия һәм йылылыҡ бөркөлә. Өләсәй-ҡарт өләсәйҙәребеҙҙән күсә килгән сигеү традициялары орнаменттарҙы һәм символдарҙы дөрөҫ ҡулланыу тураһындағы мәғлүмәт менән бергә быуындан-быуынға күсә барырға тейеш", - тине Төбәк-ара һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлек бүлеген етәкләүсе Зарина Хәсәнова.

Әйткәндәй, "Башҡортостандың сигелгән картаһы" проекты 2023 йылдың авгусында Сыуашстандың Чебоксар ҡалаһында үткән "Сигелгән Рәсәй" Бөтә Рәсәй фестивалендә ҡатнашты һәм ил буйлап үҙ төбәктәрен һәм муниципаль берәмектәрҙе нағышта сағылдырыу башланғысын дауам итте. "Сигелгән Башҡортостан" фестивале Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың сигеү йолаларын тергеҙеү, һаҡлау һәм популярлаштырыу маҡсатында ойошторолдо, шулай уҡ ул биҙәү-ғәмәли сәнғәт өлкәһендә эшләгән оҫталарҙы бергә тупларға һәм ижади үҫешкә этәргес көс биреүгә булышлыҡ итәсәк, тип уйланыла.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ҺӘЙКӘЛДЕ ХӘСТӘРЛӘП...



**Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәлен реконструкциялау эштәрен ноябрҙә башларға йыйыналар.**

Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының фән, мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт буйынса комитеты ултырышында республиканың мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы начальнигы Салауат Ҡолбахтин хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, хәҙерге көндә проект документацияһы дәүләт экспертизаһы идаралығында ҡарала. Проектҡа ярашлы, һәйкәл үҙе лә, нигеҙе лә реставрациялана. Һәйкәлде һүтеп алырға кәрәк. Эштәрҙең яҡынса хаҡы 300 миллион һумға баһалана. Һәйкәлде төҙөкләндереүҙе бер йылда тамамларға ниәтләйҙәр.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, милли батырыбыҙ һәйкәле федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объекттарына ҡарай. Уны Өфө биләмәһендәге цехта реставрациялайҙар, тип хәбәр иткәйне Башинформ.

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

12+

✓ *Милли республикалар үҙ хоҡуҡтарын киңәйтеү мөмкинлеге алды. Шул уҡ хоҡуҡтар беҙҙең республиканы сәйәси, иҡтисади яҡтан да бер баҫҡысҡа күтәрергә мөмкинлек бирҙе.*



БАШ ҠАЛАМ

# ҠЫУАНЫС КЕМГӘ?

**Өфөбөҙҙә барған үҙгәрештәрҙе баш ҡалала йәшәгән йәки бында йыш булған һәр кем күреп-белеп йөрөй, әлбиттә. Миллионлы ҡаланың үҫеше етеҙ, бөтә тармаҡтарҙа ла телгә алыр һөйөнөслө ваҡиғалары бихисап, шул уҡ ваҡытта көйөнөс тыуҙырған күренештәр ҙә юҡ түгел.**

Баш ҡалала йәшәү уңайлығын булдырыу өсөн күп эштәр башҡарыла. Айырыуса, ғаиләләргә тәғәйенләнгәндәренең етерлек булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыр инем. Шулай, күптән түгел Өфө картаһында ғаилә менән ял итеү өсөн тағы ла бер матур урын, атап әйткәндә, ҙур тәҙәкләндереү эштәренән һуң үҙенең ишектәрен асҡан Ҡурсаҡ театры алдында Миниатюралар аллеяһы барлыҡҡа килде. Унда Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың билдәле тәбиғәт һәм мәҙәни-тарихи объекттарын күрергә була. Был ниәт бик уйланып эшләнгән, тип билдәләр инем. Һәр кемдең дә был матур урындарҙы һәм объекттарҙы барып күреү мөмкинлеге юҡ, ә баш ҡалабыҙ уртаһында уларҙың барыһын да бер урында күрергә була. Ҡырымдағы "Ҡарлуғас ояһы", Волгоградтағы "Тыуған ил - Әсә" монументы, ДНР-ҙағы "Белоһарай маяғы", Мәскәүҙәге "Василий Блаженный Соборы", Карелиялағы "Кижи" һәм башҡа билдәле урындар һәм объекттар асыҡ һауалағы музейҙы барлыҡҡа килтерә. Уларҙы республикабыҙҙың "Салауат Юлаев" һәйкәле, "Ләләтюльпан" мәсете, "Шүлгәнташ" музейы һәм мәмерйәһе, Тура-хан мавзолейы, Ирәкташ тулыландырып тора.

Кескәйҙәр өсөн боронғоса ҡәлғәләр һәм манаралар менән балалар майҙансығы ла тергеҙелгән. Бында улар асыҡ һауала бәүелсәктә эйергә һәм башҡа уйынсыҡтарҙа уйнарға мөмкин. Беҙ "Ҡурсаҡ театры" туҡталышында йәшәйбеҙ, шуға күрә театр алдына ғаиләбеҙ менән көн һайын киләбеҙ. Ҡунаҡҡа килгән туғандар һәм дуҫтарҙы ла мотлаҡ алып килеп күрһәтәбеҙ был матур урынды.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡала киңлеген төҙөкләндереүгә бүлгән иғтибары маҡтауға лайыҡ. Өфө һәм "йәшел ҡала" күптән синонимға әйләнгән. Һәм был исемде юғалтмаҫ өсөн республика һәм ҡала хакимиәте күпте эшләй: парк һәм скверҙар төҙөкләндерелә, уларҙа һәм урамдар буйлап үҫкән ҡарт ағастар урынына яңы үҫентеләр ултыртыла, ойошма һәм учреждениелар алдында ла йәшелләндереүгә иғтибар ҙур.

Быйыл бөтә өфөләрҙең һәм ҡала ҡунаҡтарының яратҡан паркы - "Урмансылар паркын"да төҙөкләндереү эштәре башланды. Ҡайһы берәүҙәр парктың былай ҙа төҙөк булыуын, был эштәрҙең урынһыҙ икәнлеген, белдереп сығыш яһауҙарын аңламайым. Үҙ йортогоҙҙо, ихатағыҙҙы ла бит даими рәүештә йыйыштыраһығыҙ, нимәлер үҙгәртәһегеҙ, йышаһығыҙ, тигәндәй. Бер кем дә был эштәрҙе урынһыҙ, тип әйтмәйҙер. "Урмансылар паркы" менән дә ошондай уҡ хәл - тәү ҡарашҡа барыһы ла яҡшы кеүек, әммә уны төҙөкләндереү ҡамасауламай. Эштәр тамамланғас, ҡала уртаһындағы был ял итеү урыны тағы ла матурыраҡ булып ҡалыуына шик юҡ. Икенсе йыл төҙөкләндереү эштәре Ленин паркында ла башланасаҡ, тип ҡуҙаллана. Иң мөһиме - бындай эштәр барышында һәр парктың үҙенсәлеген юғалтмаҫҡа, күп быуындарға таныш һәм яҡын булған күренештәрҙе юҡ итмәҫкә кәрәк.

"Парктарҙа башҡорт халыҡ әкиәттәре, эпос һәм ҡобайырҙар геройҙары ла урын алһа ине. Уларҙың һәр береһендә урыҫ һәм башҡорт телендә яҙылған текстарға йүнәлтеүсе QR-код ҡуйылһа үтә лә шәп булыр. Ғөмүмән, төрлө халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадын ошо рәүешле йәш быуынға еткереү мөмкинлеген уйламаҫтармы икән", тип үҙ фекерен белдерҙе бер дуҫым. Минеңсә, шәп фекер.

Өфөбөҙ үҫә, ҡала эсендә бейек-бейек йорттар ҡалҡа, ҡала янында өр-яңы райондар барлыҡҡа килә. Республикабыҙҙың баш ҡалаһында йәшәүселәр һаны арта. Иң мөһиме, был үҙгәрештәрҙең һәр кемгә уңайлыҡ килтереүен теләргә генә ҡала.

**Әлфиә ӘМИНЕВА.**

ХӘТЕРЛӘП...



# "ЙОТА" АЛҒАНСЫ...

**Башҡортостан Республикаһы суверенитеты өсөн көрәш йылдарында башҡорт милли хәрәкәтенең аҡыллы, белемле лидерҙарының береһе булды яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшит ағай Шәкүр. Бер саҡ беҙ уға: "Көнсығыш халҡында, үҙгәрештәр осоронда йәшәргә яҙһын һиңә, тип теләү насар тонды, рәнйеште аңлата, тиһәләр ҙә, шундай осорҙа йәшәү һеҙгә лә тәтене. Ә һеҙ шул заман хаҡында әле ниҙәр әйтер инегеҙ?"- тигән һорау биргәйнек. Уның яуабы шулай булды. Хәтергә төшөрәйек:**

- Үҙгәртеп ҡороуҙар осоро, республикабыҙҙың үҙаллылыҡ яулауы беҙҙең өсөн генә түгел, бөтә ил күләмендә ҙур тарихи әһәмиәткә эйә булды. Юғалтыуҙарыбыҙ ҙа, табыштарыбыҙ ҙа бергә килде. Яҙғы ташҡында һыу менән сүп-сар ҙа аға, ер таҙарып китә бит. Беҙҙең өсөн, республика халҡы өсөн күп яғы менән был үҙебеҙҙең күптәнге хыялдарҙы, өмөттәрҙе көн тәртибенә ҡуйып, нимәгәлер өлгәшеү дәүере лә булды. Ельцин власҡа ынтылып, байҙар ҡатламын барлыҡҡа килтереү маҡсатында ил байлығын үҙләштереүгә, үҙ-ара таратып алып бөтөүгә киң юл асты, ә ябай халыҡ ярлылыҡтың сигенә еткерелде. Шул уҡ ваҡытта беҙгә лә бер "өлөш" сығарып тынысландырырға иттеме - күпме "йота" алабыҙ, шунса суверенитет бирергә мәжбүр булды. Бының менән милли республикалар үҙ хоҡуҡтарын киңәйтеү, алған табыштарын үҙаҡҡа генә ебәреү урынына үҙенә ҡалдырыу мөмкинлеге алды. Шул уҡ хоҡуҡтар беҙҙең республиканы сәйәси, иҡтисади яҡтан да бер баҫҡысҡа күтәрергә мөмкинлек бирҙе.

Был элекке матрешка эсендәге автономия түгел ине инде, беҙ суверенлы республика статусына өлгәштек. Ул дәүерҙә беҙ телде, мәҙәниәтебеҙҙе, үҙаллы тормошобоҙҙо яҡлау өсөн киңерәк мөмкинлектәр алдыҡ. Оҙағыраҡҡа һуҙылһа ла, дәүләт теле статусы алыу башҡорт теле өсөн мөһим бер ваҡиға ине, республикала йәшәгән халыҡтарҙың бындай үҙаллылыҡтың кәрәклегенә инаныуы ла мөһим булды.

Үҙаллылыҡҡа хоҡуҡтарҙы халыҡ-ара нормаларға таянып аңлатырға йәмәғәтселек тә өлгөрөп етте. Республиканың үҙ Президенты вазифаһын, үҙенең атрибуттарын - гимны, гербы һәм флагын булдырыу ошо үҙаллылыҡты рәсми таныу булды.

Әлбиттә, ошо ваҡиғаларҙың эсендә ҡайнап, йәмәғәтселек эштәрендә ҡатнашып йөрөгән кеше булараҡ, минең өсөн был заман алһыҙ-ялһыҙ эш осоро ине. 90-сы йылдарҙа "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге көн һайын ултырыштар үткәрә ине, тип хәтерләйҙәр хәҙер. Эйе, дөрөҫ, ысынлап та шулай булды. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгендә көн һайын, хәлдән тайғансы эшләргә тура килде. Өҫтәүенә, ижад итә торған шәхси ваҡытым менән дә иҫәпләшеп тороп булманы. Ярай әле, институтта өлкән ғилми хеҙмәткәр буларак, бәләкәй генә эш хаҡы ала инем.

Реформалар дәүере һаман да дауам итә. Улар иһә йәмәғәтселекте һәр ваҡыт эшкә егеп тотоуға әйләнде. Әлбиттә, уларҙың күбеһе уңышһыҙ ҙа килеп сыҡҡылай, халыҡ борсола башлай, ләкин туранан-тура власҡа мөрәжәғәт итә алмай, шуға күрә лә уларҙың ихтыяждарын йәмәғәт ойошмалары аша власть иғтибарына еткерергә тура килә. Ә бының өсөн проблемаларҙы өйрәнергә, нигеҙләргә, һәр төрлө документтар менән дәлилләп, ҡайтанан эшләргә тура килә. Әйтеүемсә, ҡайһы саҡ был тырышлыҡтар бушҡа сығып та ҡуя, ләкин ситтән генә битараф күҙәтеп ятҡансы, һаман да йәмәғәтселек эштәрендә ҡатнашыуыма бик шатмын.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренең Annual Investment Meeting (AIM) Congress Йыллыҡ инвестиция йыйылышының генераль директоры Вәлид Фаргал менән эшлекле осрашыу үткәрҙе. Яҡтар халыҡ-ара хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен һәм республика компанияларының 2025 йылда Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә XIV AIM Congress конференцияһында ҡатнашыуын тикшерҙе.

✓Журналист һәм күп балалы атай Павел Самойлин Рәсәй Президенты указына ярашлы Батырлыҡ ордены менән бүләкләнде. Был хаҡта "Башҡорт батальоны" телеграмканалы хәбәр итә. Павел Самойлин 2023 йылдың ноябрендә контракт төҙөп, махсус хәрби операция биләмәһенә юлланды. Уның позывнойы - "Ҡайтыр". Быйыл апрель башында яугир дрон-камикадзе һөжүменә дусар булған. Яҡташыбыҙ ҡаты яраланған, аңын юғалтып, дүрт көн буйына емереклектәр аҫтында ятҡан. Алыш тынғас, иптәштәре яу урынына килеп, уны эвакуациялаған.

✓Башҡортостанда Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттарының исемдәре иғлан ителде. Архитектура өлкәһендә премияға Өфө хосписы проекты өсөн "Башкиргражданпроект" проект институты хеҙмәткәрҙәре лайыҡ булды. Сәнғәт өлкәһендә премияны Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Салауат Щербаков алды. Шулай уҡ "Төньяҡ Амурҙары" тулы метражлы анимация фильмын төшөргән "Муха" йәмғиәте директоры Артур Абдрахманов, "Башҡортостан" киностудияһы директоры Юнир Әминев, рәссам-карикатурист Камил Буҙыҡаев дәүләт премиялары менән билдәләнде.

✓Өфөгә "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара спорт форумына Рәсәй Олимпия комитетының ҙур делегацияһы килә, уның составында - синхронлы йөҙөү буйынса ете тапҡыр олимпия чемпионы Светлана Ромашкина, фехтование буйынса ике тапҡыр олимпия чемпионы Софья Позднякова, спорт гимнастикаһы буйынса Олимпия уйындары чемпионы Никита Нагорный, фехтование буйынса ике тапҡыр олимпия чемпионы Софья Великая, шулай уҡ тренерҙар, Рәсәйҙең олимпия резервына ингән йәш спортсылар бар. Улар Рәсәй Олимпия комитеты спортсылары комиссияһының киңәйтелгән ултырышында ҡатнаша.

✓2025 йылда Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәре Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләй, тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин БДБ саммитындағы сығышында. Шулай уҡ ул Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһендә хеҙмәт даны ҡалаһы тигән мәртәбәле исем булдырырға һәм уны Бөйөк Ватан һуғышында хәрби, граждандыҡ продукцияһын өҙлөкһөҙ етештереүҙә тәьмин итеп, Еңеүгә ҙур өлөш индергән ҡалаларға бирергә тәҡдим итте.

*✓ Туған телде иң беренсе нәүбәттә милләт үҙе һаҡларға бурыслы. Әгәр ҙә башҡорт балаһы үҙенең туған телен өйрәнмәй икән, ғаилә был эштән ситтә икән, дәүләт ярҙамы менән генә туған телебеҙҙе һаҡлап булмаясаҡ.*



*ХӘТЕРЛӘП...*

# ФӘҠӘТ ҮҘГӘРЕШТӘР АША...

**Һанай китһәң, беҙгә суверенитет бик күпте бирҙе, бөгөн беҙ ул йылдарҙа өлгәшкәндәрҙең күпселеген юғалтып та өлгөрҙөк. Шулай ҙа, хәҙерге көн күҙлегенән ҡарағанда, нимә бирҙе һуң беҙгә суверенитет? Был йылдар башҡорт милләте өсөн нимәһе менән әһәмиәтле? Ошо һорау менән сәйәсәт фәндәре докторы, профессор Мансур Әнүәр улы ӘЙҮПОВҡа мөрәжәғәт иттек:**



- Суверенитет иҡтисади һәм сәйәси үҙаллылыҡ шарттарында республикаға, уның халҡына, башҡорт халҡына ҙур бер баҫҡысҡа күтәрелергә мөмкинлек бирҙе. Башҡорт милләтенә уның тарихы, меңәрләгән батыр улдары әйләнеп ҡайтты, милли теле, мәҙәниәте, сәнғәте үҫештө һәм быларҙы башҡорт милләте бер ҡасан да онотмаясаҡ һәм бынан һуң бер ваҡытта ла ошо егерме йылдан артыҡ йәшәгәндән түбән кимәлдә йәшәргә риза булмаясаҡ. Милләттең тарихи хәтере уяныуының төп әһәмиәте бына ошонда.

Дәүләт суверенитетын иғлан иткәс, беҙ ике референдум үткәрҙек. Уның һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Республикаһының иҡтисади үҙаллылығы һәм Рәсәй Федерацияһы менән килешеү мөнәсәбәте өсөн республиканың 75 процент халҡы ыңғай тауыш бирҙе. 1990 йылдың СССР ҡануниәте буйынса беҙ Союз килешеүенә ҡул ҡуйырға тейеш инек.

Бөгөн беҙ юл сатында. Ысынлап та, милләт артабан ни эшләргә тейеш? Һуңғы егерме йыл тик башҡорттар файҙаһына ғына булды, тип яңылыш уйлаусылар ҙа бар. Был йылдар эсендә республикабыҙҙа йәшәгән бар милләттәр татыу йәшәне. Миңә Раил Кузеевтың милләткә ҡарашы оҡшай. Ғалим милләтте бер туҡтауһыҙ хәрәкәт итеүсе күренеш тип атай. Был процесс өс факторға бәйле: тәбиғи-тарихи, социаль-иҡтисади һәм мәҙәни-сәйәси факторҙар. Төрлө тарихи осорҙа төрлө факторҙар үҫеш процесын, уның йүнәлешен билдәләй, әммә был процесты туҡтатыу мөмкин түгел. Уны башҡалар туҡтата һәм емерә алмай, тик милләт үҙе генә быны эшләй ала.

Бөгөн туған телде һаҡлау проблемаһы бик киҫкен тора. Беҙ һаман да, туған телебеҙҙе дәүләт һаҡларға тейеш, тип ҡарайбыҙ. Минеңсә, **туған телде иң беренсе нәүбәттә милләт үҙе һаҡларға бурыслы. Әгәр ҙә башҡорт балаһы үҙенең туған телен өйрәнмәй икән, ғаилә был эштән ситтә икән, дәүләт ярҙамы менән генә туған телебеҙҙе һаҡлап булмаясаҡ.**

Тағы бер мөһим мәсьәлә. Киләсәктә милләт фәҡәт үҙгәрештәр аша ғына үҫә аласаҡ. Беҙ күп осраҡта үҙгәреште бик ябайлаштырабыҙ. Башҡорт кешеһе Австралиялағы, Америкалағы башҡорттар менән интернет аша бәйләнеш алып бара ала икән, был хәҙерге быуат өсөн күрһәткес була ала.

Мин яңыраҡ Юғары Советтың суверенитет хаҡында Декларация ҡабул ителгән сессияһы материалдарын яңынан ҡарап сыҡтым. Заманында был тарихи документ бик ентекләп, төрлө яҡлап тикшерелеп, халыҡ депутаттары тарафынан бер тауыштан ҡабул ителгән. Сессияла ҡатнашҡан 264 депутаттың өстән бер өлөшө самаһы ғына башҡорт булыуға ҡарамаҫтан, бер кеше генә ҡаршы тауыш биргән, 4 кеше бөтөнләй тауыш бирмәгән. Был, Декларация ваҡытында бөтә халыҡ мәнфәғәттәренә яуап биргән, тигән һүҙ.

Ә бөгөн хәл нисек һуң? Һис шикһеҙ, республика халҡы Республика көнөн ҙур байрам итеп билдәләй. 11 октябрь бөтә халыҡтар өсөн дә ҡәҙерле. Ул беҙҙең аңыбыҙҙы үҫтерҙе, киләсәккә өмөтөбөҙҙө нығытты, үҙ көсөбөҙ, булған байлығыбыҙ, емешле хеҙмәтебеҙ менән Рәсәйҙә үҙаллы булып, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күреп, төрлө халыҡ вәкилдәре үҙ-ара татыу йәшәй алабыҙ тигән фекерҙе нығытты. Суверенитеттың төп әһәмиәте, минеңсә, бына шунда.

Әммә демократия булғас, бүтән төрлө фекерҙәр ҙә бар. Бигерәк тә интернетта республиканың үҙаллылығын, милли мәҙәниәттең, сәнғәттең үҫешен, тарихты, ауылдарҙың үҙгәрешен һанға һуҡмай, Башҡортостанға бәйләнгән бөтә нәмәне яманлаусы бәндәләр күбәйҙе. Шуға күрә беҙ, суверенитет дәүерендә республикала йәшәгәндәр, уның киләсәге тураһында уйлағандар, бындай күренештәргә ҡаршы торорға, үҙаллылыҡтың әһәмиәтен бүтәндәргә лә аңлатырға тейешбеҙ. Был - бер.

Икенсенән, Рәсәй Федерацияһы субъекттарының, бигерәк тә республикаларҙың үҙаллылығы мәсьәләһе көн тәртибенән төшкәне юҡ. Сөнки төбәктәр үҙаллылығы, уларҙың киләсәктә үҫешен тәьмин итә алыуы - ул дөйөм илдең үҫешен тәьмин итеү, тигән һүҙ. Үҙәктән ярҙам көтөп, үҙәктең ауыҙына ҡарап ултырып, алға барып булмай. Ең һыҙғанып эшләп, үҙ төбәгеңде алға сығарып ҡына бөтә Рәсәйгә ярҙам итергә, уны көслө дәүләткә әүерелдерергә була. Үҙаллылыҡ - ул үҙең һәм илең өсөн яуаплылыҡ тигән һүҙ. Был хәҡиҡәтте беҙ ни тиклем тиҙерәк аңлаһаҡ, аҙымыбыҙ ныҡ, киләсәгебеҙ ышаныслы булыр, тигәнгә инанам.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҺУҒЫШ АФӘТЕ



**"...Яралыларҙың ҡысҡырыуы йөрәккә үтә: бөтөн ерҙе емереклек баҫҡан, шулар аҫтында ҡалған кешеләр күп. Был Газа секторындағы Дейр-эль-Балах мәсете - Израиль армияһы һөжүменең төп сәптәренең береһе. Урындағы мәктәп тә емерелгән. Башына снаряд ярсығы тейеп яраланған баланы яҡындағы дауаханаға алып киттеләр. Яралылар бик күп. Кемеһенә машинала урын етмәй, уларҙы ирекмәндәр күтәреп алып китә... Газаның төньяҡ райондарына һауанан 60-тан ашыу бомба ташланды, ике тәүлек эсендә бында йорттар һәм мәктәптәр емерелде. Ливандың көньяғы ла ут аҫтында ҡалды..."**

Был ren.tv-ның Яҡын Көнсығыштағы хәбәрсеһе Елена Хмураның репортажынан юлдар. Израиль Ҡораллы көстәре Ливандың баш ҡалаһы Бейрутҡа яңынан һөжүм башланы. Яуап итеп, Ливан Израиль биләмәһенә 30-лап снаряд осорҙо. Уларҙың ҡайһыһы һауала шартлатылды, ҡайһыһы Израилдең Кирьят-Шмоны районына төшөп шартланы һәм ундағы полиция участкаһын емерҙе. Бындай ут мәхшәренән һуң Ливандан тағы ла ҡасҡындар тулҡыны Төркиә менән Европаға ағылды. Дипломатик ыҙғыш башланды. Макрон Израилгә ҡорал ебәреүҙе туҡтатыуҙы талап итте. Иран властары үҙ сиратында Израилде уларҙан яуап аҙымына барыуҙы мәжбүр итмәҫкә саҡырҙы. Асыҡланыуынса, Израилдең Газа менән Ливанды көслө утҡа тотоуы Палестинаның сәйәси һәм хәрби партияһы ХАМАС-тың Израилгә бәреп инеүенең йыллығы алдынан ҡылынған акт булды. Шулай итеп, Израиль һөжүмде туҡтатырға иҫәбе юҡлығын асыҡ белдерҙе. Әйткәндәй, Иран, Израиль менән ҡапма-ҡаршылыҡтар көсәйә ҡалһа, дошманға ҡаршы тороу буйынса сценарийҙың бер нисә вариантын әҙерләүе хаҡында белдерҙе. 1 октябрҙә Иран "Хизбулла"ның етәксеһе Хәсән Насралланы үлтереүгә яуап итеп, Израиль тарафына 180-дән ашыу баллистик ракета ебәргәйне, Израил тарафының иһә Ирандың мөһим инфраструктураһына, шул иҫәптән ядро объекттарына ут асырға әҙерләнеүе мәғлүм булды. Әйткәндәй, БМО-ның спутниктарҙан алынған мәғлүмәттәренә ярашлы, Газа секторында 163 мең бина емерелгән йә зыян күргән. Хәҙер унда 42 млн тонна емереклек һәм башҡа төр ҡаты сүп-сар тупланған, уны таҙартыу өсөн 1,2 млрд доллар һәм 14 йыл ваҡыт кәрәк буласаҡ. Емереклектәр аҫтында таныу мөмкинлеге булмаған 10 меңләп кеше кәүҙәһе ҡалған. Ҡайһы бер емереклектәр аҫтында шартламай ҡалған бомбалар бик ҙур хәүеф тыуҙыра.

Украина конфликты буйынса бер нисә мәғлүмәт билдәле булды. Үҙәк разведка идаралығының (ЦРУ) элекке аналитигы Ларри Джонсон фекеренсә, Рәсәй ғәскәренең Угледарҙы алыуы 1200 километрға һуҙылған фронттың бөтөн линияһы буйынса конфликттың тиҙләтелгән фазаһына күсеү тураһында һөйләй. Рәсәй ғәскәре Украина Ҡораллы көстәрен ҡыҫырыҡлай, ә украиндарҙың ҡаршы тороу өсөн артиллерияһы ла, өйрәтелгән һалдаттары ла юҡ. Америка аналитигы белдереүенсә, һыуыҡтар башланыу менән энергоресурстар етешмәү сәбәпле, Украинаның хәле тағы ла мөшкөлләнәсәк. The Washington Post хәбәр итеүенсә, ошо араларҙа Германияның Рамштайн ҡалаһында оборона буйынса контакт төркөмө осрашыуында Украинаға НАТО-ға ҡушылыу буйынса "аныҡ аҙымдар" тәҡдим ителәсәк һәм был сара Киев теләгәнсә ашығыс төҫ алмаясаҡ. Ошо араларҙа Украина лидерының Аҡ йорт башлығы Джо Байденды үҙенең "еңеү планы" менән ентекләберәк таныштырыу өсөн тағы бер мөмкинлеге буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта Төньяҡ Атлантика альянсының яңы башлығы Марк Рютте белдереүенсә, НАТО-ның Украинаны ҡасан ошо хәрби-сәйәси блокҡа саҡыра аласағын әйтеүе ҡыйын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында КВН буйынса Башҡортостан Башлығы Кубогына уйын уҙҙы. Сараға республика етәксеһе Радий Хәбиров та килде. Уйын-көлкөлө ярыш Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантары фонды булышлығында ойошторолдо. Унда Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, шулай уҡ Белоруссиянан, барлығы 14 команда ҡатнашты. "Кесе кубок"ты Стәрлетамаҡтан "Класташтар", "Урта кубок"ты Өфөнән "Берләшкән вокал көстәре", "Оло кубок" иһә Свердловск өлкәһенән "Леон Киллер" алды.

✓Быйыл 1 октябрҙән капиталь ремонтҡа түләү сентябрь өсөн берҙәм түләү документына индерелә. Октябрҙән ремонт өсөн айырым квитанциялар килмәй. Электрон квитанциялар элекке форматта ҡала. Башҡортостан Хөкүмәте раҫлаған иғәнә күләме, түләү тәртибе һәм ваҡыты үҙгәрмәй. Түләү ваҡыты - һәр айҙың 10-сы көнөнә тиклем. Хеҙмәттәр өсөн айырым QR-код буйынса түләргә кәрәк. Капиталь ремонт өсөн взносты иҫәпләүгә бәйле һәм башҡа һорауҙар менән 8-800-775-69-77 номерына шылтыратырға мөмкин ("Башҡортостандың төбәк операторы" компанияһы).

✓Мәләүездең "Союзпромптица" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте Рәсәйҙә күркә ите етештереүсе өс алдынғы предприятие иҫәбенә инә. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә предприятие директоры Андрей Ковалев хәбәр итте. 2007 йылда нигеҙ һалынған "Союзпромптица" предприятиеһы йыл һайын 36 мең тоннанан ашыу күркә ите етештерә, уны илдең 20-нән ашыу төбәгенә, шулай уҡ Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе һәм алыҫ сит илдәрҙәге ҡулланыусыларға оҙаталар.

✓Башҡортостандың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Артем Ковшов авария хәлендәге торлаҡ күберәк булған ҡалаларҙы һәм райондарҙы атаны. Исемлектә Өфө, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Сибай ҡалалары, Бөрө, Ҡалтасы, Шишмә, Ишембай, Благовещен һәм Белорет райондары бар. Авария хәлендәге торлаҡ фондының дөйөм майҙаны 302,5 меңдән ашыу квадрат метр тәшкил итә. "Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса 2030 йылға тиклем республикала кәмендә 220 мең квадрат метр авария хәлендәге торлаҡты бөтөрөргә кәрәк", - тип билдәләне Ковшов.

✓Башҡортостандың йәш шахматсыһы үҙенең приз аҡсаһын Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға тапшырған. Ҡыҙҙың исеме Алиса. Ул дүртенсе йыл Туймазы спорт мәктәбендә шахмат менән шөғөлләнә, муниципаль һәм республика ярыштарында уңышлы сығыш яһай. Быйыл яҙ Алиса ҡыҙҙар араһында район беренселегендә еңеү яулаған. Социаль селтәрҙә Махсус хәрби операция яугирҙарына аҡса йыйыу тураһында иғланды күргәс, бүләк аҡсаһын радиоэлектронлы көрәш системаһын һатып алыу өсөн тапшырырға ҡарар иткән.

✓ *"Саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәткә алыныусылар Махсус хәрби операцияла ҡатнашмай. Көҙгө саҡырылыш 2024 йылдың 1 октябренән 31 декабренә тиклем тормошҡа ашырыла", - тине республиканың хәрби комиссары Михаил Блажевич.*



ҠЫҪҠАСА

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН...

**2024 йылдың 9-11 октябрендә Башҡортостанда башҡорт теле буйынса онлайн-олимпиада үтә. Ул быйыл икенсе тапҡыр ойошторола.** Ҡатнашыусылар өсөн төрлө кимәлдәге онлайн-тест һорауҙары әҙерләнгән: башланғыс кимәл - башҡорт телен яңы өйрәнә башлағандар өсөн; ирекле кимәл - башҡорт телендә иркен аралашҡан ҡатнашыусылар өсөн; өсөнсө төр һорауҙар - башҡорт теленең диалекттары менән ҡыҙыҡһынған ҡатнашыусылар өсөн. Олимпиаданың сайтына инеп, теркәлеү үткәс, өс кимәлдең береһен һайлап, 45 минут эсендә 30 һорауға яуап бирергә генә ҡала. Тест тамамланғас, һәр ҡатнашыусыға йыйылған балдар һаны менән сертификат тапшырыла. Олимпиада тамамланғандан һуң сайтта белемде үҙ аллы тикшереү өсөн һорауҙарға дөрөҫ яуаптар ҡуйыла. Әгәр ҙә теркәлеү, тест үтеү, сертификат алыу йәки техник йәһәттән ҡыйынлыҡтар тыуһа, +7(3472) 46-58-24 телефон һандары буйынса мөрәжәғәт итергә мөмкин.Проект Башҡортостан Башлығы гранттары фонды булышлығында Башҡортостан Башлығы грантына тормошҡа ашырыла.

✓ **Башҡортостан эшҡыуарҙары берлектә финанслау шарттарында хәләл стандарт буйынса сертификат алырға мөмкин. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә хәбәр итте.** Был хеҙмәт - сәнәғәт һәм ауыл хужалығы производствоһы, инновациялы продукция әҙерләү һәм индереү менән шөғөлләнгән бәләкәй һәм урта бизнес вәкилдәре өсөн. "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ, эшҡыуарҙар башланғысына ярҙам" милли проекты сиктәрендә беҙҙең Төбәк инжиниринг үҙәге бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа дәүләт ярҙамы күрһәтә. Уны алыу өсөн 18 октябргә тиклем ғариза бирергә кәрәк. Был сертификат нимә бирә? Иң элек продукцияның юғары сифатын һәм уның экологик яҡтан таҙа булыуын раҫлай. Был Башҡортостанда һәм башҡа төбәктәрҙәге ҡулланыусылар өсөн дә, тышҡы баҙарға сығыу өсөн дә мөһим. Беҙҙең партнерҙар араһында ситтән продукция индереү өсөн хәләл сертификат төп шарт булған илдәр бар", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ **Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә 2024 йылдың ете айында халыҡтың миграция үҫеше статистикаһы менән таныштырҙы. Халыҡ һаны 2014 кешегә артҡан.** "Яҡшы күрһәткес, - тип билдәләне республика етәксеһе. - Беҙгә эшсе көстәр ҙә, халыҡ та күсеп килә, бик яҡшы. Был иһә йәмғиәттең торошо һәм төбәктең иҡтисади хәле күрһәткестәренең береһе". Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостанда халыҡтың миграция үҫеше күҙәтелә. Быйыл Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында, Башҡортостандан тыш, ике төбәктә халыҡтың миграция иҫәбенә артыуы теркәлгән: Татарстанда (+3716) һәм Удмуртияла (+578). Дөйөм алғанда, Волга буйы федераль округында халыҡтың 3667 кешегә кәмеүе күҙәтелгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҢ ЯРАТҠАН БАЙРАМ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҡытыусыларға республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы. Ул шулай уҡ ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусыларҙың гранттар конкурсы еңеүселәрен бүләкләне.**

"Был - йәмғиәттә иң сағыу һәм яратҡан һөнәри байрамдарҙың береһе. Ул ғүмере буйына уҡытыусы тигән бөйөк исемде йөрөткәндәрҙе берләштерә. Был көн барыбыҙҙы ла, элекке уҡыусыларығыҙҙы, тулҡынландырғыс мәктәп йылдарын иҫкә төшөрөргә, остаздарыбыҙға ихлас рәхмәт һүҙҙәрен белдерергә саҡыра. Мәктәптәрҙә, гимназияларҙа һәм лицейҙарҙа тәжрибәле педагогтар - беҙҙең "алтын фонд" һәм йәш талантлы уҡытыусылар эшләй. Һеҙ барығыҙ ҙа - сағыу, үҙ эшен яратҡан профессионалдар. Һәр уҡыусының тормошта ниндәй юлды һайлауы, уңышы һеҙҙең белемгә һәм оҫталыҡҡа бәйле. Һеҙҙең арымай-талмай эшләүегеҙ - дәүләт әһәмиәтендәге хеҙмәт. Тап ул башлыса республиканың һәм илдең киләсәген билдәләй. Һеҙ балаларҙы фән нигеҙҙәренә өйрәтәһегеҙ, уларға талантын, үҙаллы фекерләү, яуаплы ҡарарҙар ҡабул итеү һәләтен асырға ярҙам итәһегеҙ. Иң яҡшы әхлаҡи һәм патриотик миҫалдарҙа илебеҙҙең лайыҡлы граждандарын тәрбиәләйһегеҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Радий Хәбиров Башҡортостанда уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреү өсөн күп эштәр башҡарылыуы хаҡында һөйләне. Быйыл балалар баҡсаларының йәш педагогтарына яңы грант ярҙамы программаһы эшләй башланы һәм 50 еңеүсе тәүге тапҡыр 575-әр мең һум аҡса алды. Башҡортостан Башлығы ҡарары буйынса быйыл гранттар һаны 75-кә тиклем арттырылды. Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы еңеүселәренә һәм уларҙы әҙерләгән педагогтарға түләү - 300 мең һумғаса, ә призерҙарға һәм уларҙың уҡытыусыларына 150 мең һумғаса еткерелде. Республикала берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса 100 балл йыйған уҡыусылар әҙерләгән уҡытыусыларға 50-шәр мең һум премия түләнә.

# ИКМӘК БУЛА!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә төбәктә урып-йыйыу кампанияһына яҡынса йомғаҡ яһалды.**

Республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахманов хәбәр итеүенсә, 7 октябргә аграрийҙар иген һәм ҡуҙаҡлы иген культуралары сәсеүлектәренең 92 процентын эшкәрткән, 2,9 миллион тонна иген һуғып алған. Уртаса уңыш - гектарынан 21,8 центнер, был 2023 йылғы күрһәткестән юғарыраҡ (19 центнер). "Һигеҙ муниципалитет аграрийҙары 100 мең тоннанан ашыу иген йыйған, улар араһында иң алдынғы муниципалитет - 200 мең тоннаға яҡын күрһәткес менән Стәрлетамаҡ районы. Ҡырмыҫҡалы, Саҡмағош һәм Ауырғазы райондары эшсәндәре юғары уңышҡа өлгәште, улар гектарынан 30 центнерҙан ашыу йыйған, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Илшат Фәзрахманов. - 120 мең гектар иген һәм кукуруз, ҡарабойҙай, тары культураларын йыйып алырға ҡалды".

9-12 октябрҙә Башҡортостан делегацияһы Мәскәүҙә XXVI "Алтын көҙ" Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә ҡатнаша, тип өҫтәне Илшат Фәзрахманов. Төбәктең ауыл хужалығы етештереүселәре форумдың эшлекле программаһы сиктәрендә сығыш яһаясаҡ, шулай уҡ тармаҡтың заманса ҡаҙаныштары һәм милли брендтар менән таныштырыр, тип көтөлә. Ә 1 ноябрҙә Өфөлә төбәктең Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған тантаналы сара үтәсәк.

# АРМИЯҒА КИТӘ ЕГЕТТӘР!

**Көҙ көнө Башҡортостандан 4 меңдән ашыу егет хеҙмәт итеү урындарына юллана, тип хәбәр иттеләр республиканың хәрби комиссариатында.**

Улар Ҡораллы көстәрҙең бөтә төр ғәскәрҙәренә, шулай уҡ башҡа федераль башҡарма власть органдарының хәрби частарына ебәрелә, тип билдәләнеләр ведомствола. Һалдаттарҙы Өфөнөң йыйылыу пунктынан ғәскәрҙәргә оҙатыу 2024 йылдың октябрь аҙағында башлана. Һәр береһе обмундирование, несессер (юл кәрәк-яраҡ футляры), аҙыҡ-түлек һәм әйберҙәр менән тәьмин ителә. "Әйткәнебеҙсә, саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәткә алыныусылар Махсус хәрби операцияла ҡатнашмай. Көҙгө саҡырылыш Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтендә билдәләнгән ваҡытта, 2024 йылдың 1 октябренән 31 декабренә тиклем тормошҡа ашырыла", - тине республиканың хәрби комиссары Михаил Блажевич.

Граждандарға йәшәгән урын буйынса хәрби комиссариатҡа килергә кәрәклеге тураһында ҡағыҙ повестка ебәрелә. Документтар егеттәргә расписка яҙып йәки заказлы хат менән килтерелә. Республиканың хәрби ведомствоһында йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһе эшләй (консультация-хоҡуҡ пункты), унда (347) 228-02-92 номеры буйынса шылтыратырға мөмкин. Эш көндәрендә - иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 7-гә тиклем, ялдарҙа иһә иртәнге 10-дан киске 5-кә ҡәҙәр. Бынан тыш, башҡа телефон номерҙары ла эшләй, ошо һандарҙы йыйып, көҙгө саҡырылышҡа бәйле һорауҙарҙы бирергә мөмкин: Граждандарҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү һәм саҡырыу бүлеге - (347) 253-13-48 (сәғәт 9-ҙан киске 6-ға хәтлем). Өфө гарнизонының хәрби прокуратураһы - (347) 250-05-10 (эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем). Өфө гарнизон хәрби суды - (347) 259-14-83 (эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем). Ашығыс психологик ярҙам, республика йәштәр психологик үҙәге - (347) 276-56-12 (көн һайын иртәнге сәғәт 9-ҙан төнгө 12-гә тиклем).

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

# ҠЫРҒЫҘҘАР МЕНӘН...

**Башҡортостандың Ҡырғыҙстан менән дөйөм тауар әйләнеше 2024 йылдың 7 айы йомғаҡтары буйынса 98 процент республика экспортынан тора, тип хәбәр итте республиканың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры вазифаһын башҡарыусы Маргарита Болычева Ҡырғыҙстандың "Саясат. kg" порталының баш мөхәррире Нурғазы Анарҡолов менән осрашыуҙа.**

Экспорт эшмәкәрлеге "Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт" милли проекты сиктәрендә алып барыла. "Башҡортостан тауарҙары араһында Ҡырғыҙстанда яғыулыҡ-энергетика комплексы һәм химия сәнәғәте продукттары, ағас, металдар һәм уларҙан эшләнгән изделиелар, шулай уҡ аҙыҡ-түлек тауарҙары һәм сеймал айырыуса ҙур һорау менән файҙаланды. Ике республика ла дуҫлыҡ, мәҙәни, гуманитар, ғилми һәм белем биреү йүнәлештәрен үҫтереү менән ҡыҙыҡһына. Әйтәйек, 2023-2024 йылдарҙа Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында 254 ҡырғыҙ студенты уҡый", - тип билдәләне Болычева.

Нурғазы Анарҡолов һүҙҙәренсә, портал редакцияһы Ҡырғыҙстан журналистары һәм блогерҙарының Өфөгә Халыҡ-ара бизнес аҙналығына килеү мөмкинлеген ҡарарға әҙер. Бынан алдараҡ Башҡортостандың Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренә экспорты 78 проценттан ашыу тәшкил итеүе билдәле булды.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостандың барлыҡ ҡала һәм райондарында йылытыу миҙгеле башланды, тип белдерҙеләр Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында. "Әгәр фатирығыҙға һаман да йылылыҡ бирелмәһә, башта идара итеүсе ойошмаға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Телефон номерын квитанцияла табырға мөмкин", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр министрлыҡта. Бынан тыш, өфөләр үҙ районының торлаҡ хужалығы идаралығына шылтырата ала: 8 (347) 235-48-00, 235-95-35 . Шулай уҡ йылытыу миҙгеленә бәйле һорауҙар буйынса ҡыҙыу линия эшләй: 8 (347) 294-94-00 .

✓ 20 октябрҙән 21 ноябргә тиклем Өфөнөң Шаҡша күперендә транспорт хәрәкәте ябыла, тип хәбәр иттеләр мэрияла. Был төҙөлөш-монтаж эштәрен башҡарғанда күпер конструкцияларының тирбәлеүенә юл ҡуймау өсөн кәрәк. Схемала "Һалле ҡалаһы исемендәге урам" туҡталышынан шәхси транспортта йөрөү варианттары күрһәтелгән. Күперҙе капиталь төҙөкләндереү эштәре "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә алып барыла.

✓ "Ҡурай тотҡан малай" фонтаны алдындағы майҙанда өҫтәмә яҡтыртҡыстар ҡуйылды. "Йондоҙло күк" урам гирляндаһының дөйөм оҙонлоғо - 210 метр. Бындай гирляндалар аллеяларҙы, парктарҙы, беседкаларҙы, майҙандарҙы яҡтыртыу өсөн ҡулланыла. Улар Ҡаҙанда, Мәскәүҙә һәм башҡа ҡалаларҙа йәйәүлеләр урамдарын биҙәй. Скульптура композицияһы Октябрь проспектында, элекке "Искра" кинотеатры алдында тора. Ул 1974 йылда Мәскәү скульпторы Маргарита Соловьева-Ефимова проекты буйынса урынлаштырылған.

✓ Республика көнөн билдәләү айҡанлы был аҙнала Башҡортостан поликлиникалары эш графигын үҙгәртә. Йома, 11 октябрҙә, поликлиникалар шәмбе графигы буйынса иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 5-кә тиклем эшләй. "Медицина ойошмаларында халыҡты стационар дауалау, шулай уҡ ваҡытында ашығыс һәм планлы медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн резерв урындар ҡарала", - тип хәбәр иттеләр республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан.

✓ Өфө мэры Ратмир Мәүлиев эш сәфәре барышында Белгородта булды. Бында йылы кейем-һалым, аяҡ кейеме, һыу, аҙыҡ-түлек, гигиена әйберҙәре тейәлгән гуманитар ылау килде. "Белгород хакимиәте башлығы Валентин Демидов менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙыҡ. Өфө менән Белгород араһында күптән дуҫтарса һәм эшлекле мөнәсәбәттәр булдырылған. Бөгөн бер-беребеҙҙән өйрәнәһе нәмәләр байтаҡ", - тип яҙҙы Ратмир Мәүлиев үҙенең телеграм-каналында. Бынан алдараҡ Курскиҙа Өфө мэры хәрбиҙәргә 200 дрон һәм УАЗик тапшырҙы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Башҡортостан Башлығы менән беҙ асыҡ грунтһыҙ тулы трамвай селтәрен булдырыу мәсьәләһен тикшерҙек. Киләһе йылда трамвай селтәрҙәрен реконструкциялауға контракттар төҙөргә ниәтләйбеҙ", - тип билдәләне Өфө мэры.*

*ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!*



# МӘСКӘҮ БҮЛӘГЕ

**Өфөнөң транспорт линияларына Мәскәүҙән килгән Польшала етештерелгән PESA трамвайҙары сыҡты. Был хаҡта ҡала мэры Ратмир Мәүлиев муниципалитет хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә хәбәр итте.**

Билдәле булыуынса, трамвайҙар 5-се маршрутта пассажирҙарҙы хеҙмәтләндерә. "Республиканың баш ҡалаһына бөтәһе 69 вагон тапшырыласаҡ. Был бик яҡшы ваҡиға, әммә уларҙы тиҙерәк килтерергә кәрәк. Беҙҙең бурыс - 15 трамвайҙы бер ай эсендә, 1 ноябргә тиклем, линияға ебәреү. Мәскәү ҡалаһы мэры Сергей Семенович Собянинға рәхмәт, бындай бүләкте алыуыбыҙға бик шатбыҙ", - тине ҡала етәксеһе. Мәүлиев әйтеүенсә, киләһе этап ҡалала тулы трамвай селтәрен булдырыу буласаҡ. "Башҡортостан Башлығы менән беҙ асыҡ грунтһыҙ тулы трамвай селтәрен булдырыу мәсьәләһен тикшерҙек. Киләһе йылдың яҙында трамвай селтәрҙәрен реконструкциялауға контракттар төҙөргә ниәтләйбеҙ. Шул сәбәпле беҙ юлыбыҙҙы киңәйтәсәкбеҙ", - тип билдәләне Өфө мэры.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылда Өфөлә электр транспорты менән 15 миллиондан ашыу кеше файҙаланған, шуларҙың 7,8 миллионы - троллейбус, 7,5 миллионы - трамвай. 2024 йылда ете ай эсендә был һан 7,7 миллиондан ашыу пассажир тәшкил иткән.

# ҺЫУ БАШНЯҺЫ ЯҢЫРҘЫ

**450 йыллыҡ тарихы булған баш ҡалабыҙҙа иҫтәлекле урындар күп. Уларҙың һәр береһе үҙенсәлекле, иҫтәлекле тарих һаҡлай. Мәҫәлән, Аксаков һәм Гоголь урамдарындағы ыҡсым ғына ағас йорттар, быуаттар үтһә лә үҙ мөһабәтлеген юғалтмаған кирбес йорттар, башҡа объекттар - быларҙың барыһы ла беҙ белгән һәм яратҡан Өфөбөҙ.**

Ошондай иҫтәлекле объекттарҙың береһе - ул быға тиклем ташландыҡ хәлдә торған Ленин районындағы Өфө һыу башняһы. 1901 йылда төҙөлгән һыу башняһы Өфөнөң тәүге һыу менән тәьмин итеү системаһының хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалған берҙән-бер объекты. Өфөнөң Алтай урамында урынлашҡан һәм төбәк кимәлендәге был мәҙәни объект тирәләй быйыл башланған төҙөкләндереү эштәрен ҡыуанып ҡаршы алдым. Ҡала хакимиәтенең инициативаһы һәр өфөлөнөң генә түгел, ә барлыҡ республика халҡының күңеленә хуш килгәндер, тип уйлайым.

Быға тиклем был тирәләр ташландыҡ хәлдә булһа ла, кеше күп йөрөнө, ә төҙөкләндереү эштәре тамамланғас, кеше аяғы бөтөнләй өҙөлмәйәсәгенә шик юҡ. Эргәһендә генә Салауат Юлаев һәйкәле, Телеүҙәк, Конгресс-холл булған был урын ҡаланың тағы ла бер иҫтәлекле, үҙенә тартып торған ере буласаҡ. Беҙ уға яҡын ғына йәшәгәс, әленән-әле "ревизия" менән барып торабыҙ. Төҙөкләндереү тураһында ҡарар ҡабул ителгәндән һуң эштәрҙең ни тиклем тиҙ башҡарылыуын күреп, күңел һөйөнә. Әлеге мәлдә Һыу башняһы тирәләй тротуар плиткаһы һалдылар, тышҡы яҡтыртыу системаһын эшләнеләр, бинаның үҙе лә хәҙер яҡтыртылып, әллә ҡайҙан күренеп тора.

Хәбәрҙәрҙән уҡып белеүемсә, ҡаланың Ленин районы хакимиәте Өфө һыу башняһы менән Ағиҙел яры буйын тоташтырған баҫҡыс эшләтеү тураһында контракт төҙөгән. Ҡала етәксеһе Ратмир Мәүлиев белдереүенсә, баҫҡыс элекке һуҡмаҡ урынында буласаҡ. Әлеге мәлдә баҫҡыс буласаҡ тау битләүен таҙартыу эштәре барғанлығын үҙ күҙем менән күреп йөрөйөм. Тауҙың текә битләүен таҙартыу, сүп-сарҙы унан сығарыу, баҫҡыс өсөн урын эшләүҙең ни тиклем ауыр икәнлеген аңлатыу кәрәкмәйҙер, шуға күрә был эште башҡарғандарға, уны ниәт иткәндәргә барлыҡ өфөләр исеменән рәхмәтемде еткерәм.

**Айбулат ОМОРҘАҠОВ.**

# ТАКСИҘА - БУШЛАЙ

**Өфөлә "Именлек" республика геронтология үҙәгендә пилот режимында "Социаль такси" хеҙмәте асыла.**

Уның менән инвалид балалар һәм өлкәндәрҙән беренсе төркөм инвалидтары файҙалана аласаҡ. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Ленара Иванова хәбәр итте. Социаль такси хеҙмәте бушлай һәм Өфө эсендә күрһәтелә. Хеҙмәт менән айына дүрт тапҡыр файҙаланырға мөмкин, йөрөү оҙайлығы ике сәғәттән артырға тейеш түгел. Хеҙмәт автопаркын барлығы һигеҙ машина тулыландырасаҡ, уларҙың береһе терәк-хәрәкәт аппараты эшмәкәрлеге боҙолған пассажирҙарҙы ташыу өсөн йыһазландырыла. Хеҙмәт менән файҙаланыу өсөн шәхсән йәки электрон почта аша шәхесте һәм инвалидлыҡты раҫлаусы документтарҙы, шулай уҡ шәхси иҫәптең страховка номерын тапшырырға кәрәк. Яҙылыу диспетчер аша ике көн алдан алып барыла. Дауаханаға, дарыуханаға, дәүләт һәм социаль учреждениеларға, Күп функциялы үҙәккә, вокзалдарға һәм аэропортҡа, көнкүреш хеҙмәттәре күрһәтеү ойошмаларына, элемтә бүлексәләренә барып етергә мөмкин буласаҡ. Водителдәр пассажирҙарға машинаға ултырырға һәм төшөргә, оҙатыусы булмаған осраҡта учреждениеға инеү урынына барып етергә, пандус йәки баҫҡыс буйлап күтәрелергә ярҙам итә.

*"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ВӘЛИЕВ ДАМИР ЖӘҮӘТ УЛЫ

Д.Ж. Вәлиев - күренекле башҡорт ғалимы, философ, юғары мәктәп уҡытыусыһы һәм йәмәғәт эшмәкәре, РФ ижтимағи фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре. Ул 1940 йылдың 2 ғинуарында Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Этбай ауылында тыуған. Тыуған ауылында 7 йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1955 - 1959 йылдарҙа Силәбе энергия-механика техникумынды урта һөнәри белем ала.

1959 - 1960 йылдарҙа Совет армияһында хеҙмәт итә.

1960 - 1963 йылдарҙа Арғаяш ТЭЦ, С.Орджоникидзе исемендәге Силәбе заводында һәм Бөтөн союз теплотехника институтының Силәбе филиалында эшләй. 1963 - 1965 йылдарҙа Свердловск юридик институтының көндөҙгө бүлегендә уҡый. Институтты тамамлағандан һуң 1966 - 1967 йылдарҙа ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитетында инструктор вазифаһында эшләй. 1967 - 1970 йылдарҙа Урал дәүләт университеты аспирантураһында уҡый һәм "Этикала императивлыҡ проблемаһы" темаһына кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. 1970 - 1972 йылдарҙа Свердловск юридик институтының Өфө факультетында уҡыта. 1972 йылдан башлап Башҡорт дәүләт университетында эшләй. 1985 - 1986 йылдарҙа - дәүләт һәм хоҡуҡ теорияһы һәм тарихы кафедраһы мөдире, 1986 йылдан - этика, эстетика һәм культурология кафедраһы мөдире һәм бер үк ваҡытта (1986 - 1987) БДУ-ның тарих факультеты деканы булып эшләй.

1984 йылда "Әхлаҡтың ижтимағи күренеш булараҡ килеп сығышы" темаһына докторлыҡ диссертацияһын яҡлай. 1987 йылдан бирле профессор.

1989 йылда "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге идараһы ағзаһы итеп һайлана. 1993 йылда Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының тексын яҙыу буйынса эшсе төркөм составына индерелә. 1994 - 1995 йылдарҙа - Башҡортостан Республикаһының Президент советы ағзаһы. 1995 йылда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ағзаһы итеп һайлана. 1997 йылдан РФА Өфө ғилми үҙәгенең ижтимағи-иҡтисади тикшеренеүҙәр институтында Философия бүлеген етәкләй. Ғалим-философтың фәнни тикшеренеүҙәре этика, Башҡортостан йәмәғәтселеге тарихы, суверенитет һәм федерализм проблемаларына арналған. Ул 130-ҙан ашыу фәнни хеҙмәт авторы.

2002 йылдың 28 майында Өфөлә вафат була. Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Яңы Субыл ауылында ерләнгән.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Боланут

❖ Татрандан 2 ҡалаҡ боланутҡа 2 стакан һыу ҡойоп, 6 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Мамыҡты йылы төнәтмәгә манып, ҡолаҡҡа тығырға.

❖ Баш ауырығанда, йоҡоһоҙлоҡтан болануттың 1 ҡалаҡ тамырһабағы һәм тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 45 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

Шулай уҡ боланут һәм туҡранбаш үләндәрен тигеҙ өлөштә алып, әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 30 минут төнәтеп һөҙөргә. Сәй урынына көнөнә 1-2 стакан эсергә.

❖ Климакс осоронда 50 грамм киптереп ваҡланған боланут сәскәһенә 0,5 литр 70 процентлы спирт ҡойоп, ҡараңғы урында 2 аҙна төнәтергә, ваҡыты-ваҡыты менән һелкеп болғатып торорға. Шунан һөҙөргә. Һыуға 20-30 тамсы төнәтмә тамыҙып, көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Был баш ауыртыуын, йөрәк тибешен баҫа, шешенеүҙәрҙе бөтөрә.

❖ Аҙҡанлылыҡтан 1 ҡалаҡ боланут үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Нервылар ҡаҡшауынан 1 ҡалаҡ боланутҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. 1 стакан төнәтмәне бүлеп, көн дауамында эсеп бөтөргә.

❖ Ирҙәрҙең енси көсһеҙләнеүенән киптерелгән боланут япрағын сәй кеүек бешереп, көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә.

❖ Оҙайлы циститтан 1 ҡалаҡ боланутҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда йылы көйөнсә 1/3 стакан эсергә.

❖ Ауыҙҙың лайлалы тиресәһе елһенгәндә 1 ҡалаҡ боланут япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ауыҙҙы сайҡатырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡамыш тауығы**

**(Камышница)**



Кәүҙәһе менән был төркөмгә ҡараған ҡоштар араһында иң эреһе - күгәрсен ҙурлығында. Ҡара төҫтә, арҡаһында һәм ҡанатында көрән төҫ өҫтөнлөк итә, кәүҙәһенең аҫҡы яғы - күлһыу. Суҡышы һәм башындағы кикереге сағыу ҡыҙыл. Ҡойроғон өҫкә күтәреп йөҙгәндә ҡойроғонон аҫты аҡлы-ҡаралы һыҙатлы булыуын күрерһегеҙ. Тәпәйҙәре - йәшел. Ҡабырғаһында аҡ һыҙат бар. Ата ҡош менән инә ҡош төҫө йәһәтенән айырылмай, бары тик ата ҡамыш тауығы кәүҙәлерәк.

Тауышы әллә ни айырылып тормай, "киррк", "тьюрк", "куррыҡ", "трюрюрюрюк" тип ҡысҡыра.

Һаҡмар, Дим, Ағиҙелдең Архангел, Кушнаренко районы аша аҡҡан урынында осраған. Аҡмай ятҡан һыу сығанаҡтарына оя ҡора. Кеше аяғы үтеп инә алмаҫлыҡ шырлыҡты һайлай, әммә тауышы менән үҙенең ҡайҙалығын белдереп тора. Тыныс урындарҙа таҙа һыуға йөҙөргә сыға. Йөҙгән саҡта тәпәйҙәренен хәрәкәтләнеүенә тап килтереп башын һәм ҡойроғон да һелкеп бара. Ҡурҡыныс килеп тыуһа, ҡуйы үлән араһына инеп йәшеренә, осоп йә йөҙөп китә. Осорға яратмай.

Ояны ҡуйы үлән араһына ҡора, йышыраҡ алдан булған ояларҙы табып үҙләштерә. Ояһы тәрән, ҡупшы. Бының өсөн үҫемлектәрҙе ҡуллана. Ояһын ныҡ һаҡлай. 6-10 йомортҡа һала.

Бәпкәләрҙе икәүләп баҫып сығаралар. Беренсе йомортҡаны һалғас та, баҫырға ултыралар, шуға ла был осор 26-28 көнгә һуҙылып китә (1 йомортҡа 21-22 көн эсендә сыға). Бәпкәләр сыға тора, уларҙы йә инә, йә ата ҡош эйәртеп йөрөй ҙә башлай, икенсеһе ҡалған йомортҡаларҙы баҫа. 1,5-2 аҙна дауамында бәпкәләрҙе ашатып, яҡшылап ҡарайҙар. Улар ҡара төҫтә була. Тәүге көндән үк йөҙәләр, сума ла алалар. 1 ай эсендә ныҡыналар, шулай ҙа йылы яҡҡа осоп киткәнсе оло ҡоштарҙы ташлап китмәйҙәр, оя эсендә ҡалалар.

Һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөгән бөжәктәр менән дә, сумып, һыу аҫтынан эҙләп тотҡандары менән дә туҡланалар. Шулай уҡ орлоҡтар, еләктәр, йәш үлән дә ризыҡтары булып тора. Аҙыҡ эҙләп ярға ла сығалар, ваҡ ҡоштарҙың йомортҡаһын да һытып эсәләр, уларҙың бәпкәләрен дә ашайҙар. Төлөк әйләнәһенә әүҙем ҡош, шулай ҙа иртән һәм кисен күберәк хәрәкәтләнәләр.

Августың башында уҡ йылы яҡҡа ҡуҙғала башлайҙар һәм сентябргә тиклем осоп китеп бөтәләр. Көндө һыу яҡтылыҡтарында ял итеп үткәрәләр, төнөн осалар.

Ҡышты Кавказ, Үҙәк Азия, Африканың көньяғындағы һыу ятҡылыҡтарында үткәрә. Ҡамыш тауығына ғәҙәттә һунар итмәйҙәр. Шулай ҙа һаҡлауға мохтаж ҡош.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ҠАЛАМ

# ҺЫУ ЮЛЫ ҠАПҠАҺЫ БЫЛ!

**Республика көнө байрамына матур бер ваҡиға булып өҫтәлеп, Башҡортостандың баш ҡалаһында, Ағиҙел яры буйында, круиз лайнерҙары һәм йылға суднолары туҡталған урында, йылға ҡапҡаһы - колоннада барлыҡҡа килде.**

Өфөлә бындай объекттың барлыҡҡа килеүе яр буйын йәнләндерәсәк. "Бер нисә йыл элек беҙ йылға флотын тергеҙеүгә тотондоҡ. Йыл һайын Өфөгә күп палубалы суднолар килә, улар башҡа төбәктәрҙән йөҙҙәрсә ҡунаҡ алып килә. Яңыртылған йылға ҡапҡаһы - Өфөнөң туристик картаһында мөһим урын буласаҡ", - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә.

Ысынлап та, Өфөлә бөтә транспорт төрҙәре - автомобиль, тимер юл, һауа өсөн ҡапҡалар бар, ә тиҙҙән йылға ҡапҡалары барлыҡҡа киләсәк. "Бындай ротондалар, колоннадалар йылға буйында урынлашҡан ҙур ҡалаларҙа ғына түгел, бөтә ҡалаларҙа ла бар. Волгоград, Түбәнге Новгород, Ижевск, Һамар һәм башҡалар - уларҙың бөтәһенең дә үҙ йылға ҡапҡалары бар. Был традиция сауҙагәрҙәр заманынан килә. Өфөлә барлыҡҡа килгән йылға ҡапҡаһын халыҡ ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул итте, Өфөнөң яңы иҫтәлекле урыны тик ыңғай эмоция ғына тыуҙырасаҡ. Беҙҙең ҡалала төрлө дәүерҙәрҙе символлаштырған архитектура ҡоролмалары бар, әммә тап тарихи архитектура айырым иғтибар йәлеп итә. Беҙҙең колоннада, әлбиттә, яңы, әммә уның башҡарылған стиле бик ҡыҙыҡлы. Сухуми колоннадаһы бик яҡшы өлгө, ул беҙҙең яр буйының лайыҡлы биҙәге булыр, тип уйлайым", - тип билдәләне Башҡортостандың Архитекторҙар союзы етәксеһе Илдар Садиҡов.

Өфөләге колоннада - 1949 йылда төҙөлгән һәм Сухуми ҡалаһының визит карточкаларының береһенә, халҡының яратҡан ял итеү һәм йөрөү, туристарҙы йәлеп итеү урынына әйләнгән объекттың теүәл күсермәһе. Уның 2024 йылда барлыҡҡа килеүе Өфөнөң 450 йыллыҡ юбилейына ғына түгел, Башҡортостан менән Абхазияның дуҫлығы һәм хеҙмәттәшлеге тураһында килешеүҙең 20 йыллығына ла бүләк булып тора.

"Быйыл дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә 20 йыл тула. Әммә ныҡлы мөнәсәбәттәрҙең тамырҙары тарих төпкөлөнә барып тоташа. Уҙған быуаттың 20-се йылдарында, Волга буйында ҡот осҡос аслыҡ булғанда, абхаз ҡәрҙәштәр республикабыҙға аҙыҡ-түлек менән ярҙам итә. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында беҙҙең яугирҙар бөтә Советтар Союзында билдәле абхаз шифаханаларында һаулығын нығыта. 90-сы йылдарҙа, грузин-абхаз конфликты башланғас, беҙ уларға ярҙам итәбеҙ. Унда нефть продукттары эшелондарын ебәрәләр. Башҡортостан табиптары бойондороҡһоҙ Абхазияның яралы яугирҙарына операция яһаны. Республика вуздарында абхаз студенттары, шул иҫәптән буласаҡ медиктар белем алды", - тип, халыҡтар дуҫлығы традициялары хаҡында һөйләне Радий Хәбиров.

Шулай итеп, Өфөнөң яр буйы яңы мәғәнә менән тула, колоннаданан алыҫ түгел тағы бер символ - 1957 йылда рус һәм башҡорт халыҡтары дуҫлығы билдәһе итеп төҙөлгән Дуҫлыҡ монументы урынлашҡан, уның бөгөн Өфөнө күҙ алдына килтереүе ҡыйын, бында рәсми саралар һәм байрамдар үтә, монумент янына туристар килә. Яҡында ғына Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында өфөләрҙең хеҙмәт батырлығын символлаштырған "Хеҙмәт батырлығы ҡалаһы" стелаһы урынлашҡан. Колоннада шулай уҡ мөһим объектҡа әйләнергә тейеш.

**Роман ЯКИМЧУК.**



ҺӨЙӨНСӨ!

# БАРЫҺЫ ЛА БАЛАЛАРҒА



**Өфөлә "Салют" балалар реабилитация-белем биреү комплексы эшләй башланы. Уны асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Балалар учреждениеһы төбәк етәксеһе башланғысы менән ҡаланың Киров районындағы элекке шифахана базаһында төҙөлдө. 2018 йылдың ноябрендә һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың ата-әсәләре менән осрашыуҙа Башҡортостан Башлығы тотош республикаға эшләйәсәк заманса реабилитация үҙәген булдырыу тураһында ҡарар ҡабул ителеүе хаҡында белдергәйне. "Салют" биналарының дөйөм майҙаны - 25,7 мең квадрат метр. Бында көнөнә 250 кешегә иҫәпләнгән реабилитация үҙәге, медицина блоктары булған стационарҙар, балалар психоневрология һәм эпилептология үҙәге, шулай уҡ 192 урынлыҡ "Йондоҙ" мәктәбе урынлашҡан. "Салют" йыл һайын һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән 7 мең баланы хеҙмәтләндерәсәк, тип планлаштырыла.

- Беҙҙең республикала 20 меңдән ашыу һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән бала бар, уларға иғтибар һәм үҫеш өсөн уңайлы шарттар кәрәк. Шуға күрә беҙ ата-әсәләрҙең үтенесе буйынса "Салют" үҙәген төҙөү тураһында ҡарар ҡабул иттек. Был уникаль учреждение. Беҙ унда социаль һәм медицина реабилитацияһын, белем биреү һәм коррекция программаларын берләштерергә тырыштыҡ, йәғни бында балалар барлыҡ кәрәкле ярҙамды ла алыу мөмкинлегенә эйә. Төҙөүселәргә һәм үҙәк хеҙмәткәрҙәренә рәхмәт. Был ҙур һәм ҡатмарлы проект, уны бергәләп уңышлы тормошҡа ашырҙыҡ, - тине Башҡортостан Башлығы. - Республикала бындай балалар менән эшләү инфраструктураһы ныҡ үҫешкән, йәғни 36 коррекция мәктәбе, 23 реабилитация үҙәге бар. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостанда иң яҡшы ҡаҙаныштарҙы, реабилитация методикаларын һәм ғаиләләргә комплекслы ярҙам күрһәтеүҙе туплаусы төп учреждениеның булыуы мөһим. "Салют", был ҙур һәм кәрәкле эштең флагманы булып, балаларыбыҙға сәләмәтерәк һәм көслөрәк булырға, үҙҙәренә ышаныслы арттырырға мөмкинлек бирәсәк.

Үҙәкте асыу тантанаһынан һуң республика Башлығы реабилитация-белем биреү комплексының мөмкинлектәре менән танышты, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар һәм уларҙың ата-әсәләре менән аралашты, профилле министрлыҡ етәкселәре менән "Салют" базаһында медицина һәм педагогия университеттары студенттарын уҡытыу өсөн методик үҙәктәр, шулай уҡ бындай балалар менән эшләү өсөн белгестәр әҙерләүсе колледждар булдырыу мөмкинлеген тикшерҙе. Атап әйткәндә, Башҡорт дәүләт медицина университеты ректоры Валентин Павлов "Салют" комплексында кафедраларҙың береһенең филиалын урынлаштырырға ниәтләүҙәре хаҡында һөйләне.

- Бер айҙан Өфөгә Мәскәүҙән ҙур бригада килә, ул балаларҙы реабилитациялауҙың иң яҡшы методикалары менән уртаҡлаша. Беҙҙең бурыс - бында Өфө йәки төбәк өсөн үҙәк булдырыу ғына түгел. "Салют" тармаҡтың ысын флагманы, тотош ил өсөн берҙәм методик һәм фәнни үҙәк буласаҡ, - тине Башҡортостан Башлығы.

✓ *Ул Эссендың линияны һаҡлар өсөн 18 башҡорт полкын ойоштороу тураһындағы тәҡдимен ҡабул итмәй, сөнки был сығымдар талап итә һәм халыҡ ризаһыҙлығы ихтилалға еткерһә, уны ҡоралды көс менән баҫтырырға тура киләсәк.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф П.П. Сухтелен**

**(1830 - 1833 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Генерал Эссенды Санкт-Петербургҡа күсергәс, бында хәрби губернатор һәм айырым Ырымбур корпусы командиры вазифаһына генерал-адъютант, граф Павел Петрович Сухтелен тәғәйенләнә. Ул, изге күңелле кеше булараҡ, һәр кемгә ихлас йөрәкле, гуманлы мөнәсәбәттә булыуы менән танылыу таба, аҡыллы шәхес булараҡ та башҡаларҙан айырылып тора.

Төбәктә эштәрҙең көйләнмәгән торошон күреп, ул дөйөм тәҙәкләндереү өсөн ниҙәр етмәүен дөрөҫ аңлай, уға тиклем бында эшләгәндәр тарафынан тыныс тормош булдырыуға һәм губерна сиктәрендә ҡырғыҙҙарҙың (ҡаҙаҡтарҙың. - **Тәрж. иҫк.**) ҡырағайҙарса һөжүм итеүенән һаҡланыуға йүнәлтелгән сараларын ҡабул итмәй.

Алда бик ҙур эштәр көтәлә, һәм граф Сухтелен үҙенә һәләтле, эшсән һәм ныҡ ышанысыслы ярҙамсылар табырға тырыша, ундай кешеләр табыла һәм сайыры буйынса хеҙмәткә килә. Бына улар: майор, ә һуңынан генерал-майор Аким Иванович Середа, подполковник Николай Александрович Мансуров, Геке, аҙаҡтан шулай уҡ генерал-лейтенант һәм Урал ғәскәренең наказный атаманы; инженер-подполковник Генс, һуңынан йәшерен советник һәм Ырымбур сик комиссияһы председателе; генераль штаб полковнигы Тюфяев, Жемчужников, бында эшһеҙ тороп ҡалған отставкалағы штабс-капитан Балкашин, уны батша Александр I сәйәхәт маршрутын тарихи яҡтан дөрөҫ төҙөмәгәне өсөн эшенән бушаталар (сәбәбе - Балкашиндың Габбенең тол ҡалған ҡатынына өйләнеүендә, ул уның менән хеҙмәтенә ҡарағанда күберәк шөғөлләнә), канцелярия идарасыһы Николай Васильевич Жуковский.

Мансуров, Геке, Жемчужников хәрби отрядтар менән далаға ебәрелә; Генс бар ваҡытын ҡырғыҙ эштәренә һәм Хива, Бохара менән бәйләнештәр булдырыуға арнай; Балкашин шәхси адъютант була, Башҡортостанда эштәр алып бара, бындағы урындарҙы тикшерә һәм һунынан Урал тауҙарының ныҡ урманлы ерҙәре аша Верхнеуральскийҙан Стәрлетамаҡҡа тиклем коммерция тракты тип аталған юл һалына, ул тауарҙарҙы Ағиҙел йылғаһынан, Өфөнән Уралға, Верхнеуральскийға тиклем алып барыу мөмкинлеген бирә һәм унда төҙөлгән заводтар менән унайлы бәйләнеш булдыра, ә башҡорттар бунтҡа күтәрелгән хәлдә ғәскәрҙәрҙең хәрәкәт итеүен еңеләйттерә.

Сухтелен төбәкте ныҡытыуға булышлыҡ иткән башҡа кешеләрҙе лә таба. Граф шәхсән үҙе губернаны ҡарап, бында урынлашҡан регуляр ғәскәрҙәрҙе һәм казактарҙы тикшереп йөрөй. Ул Эссендың линияны һаҡлар өсөн 18 башҡорт полкын ойоштороу тураһындағы тәҡдимен ҡабул итмәй, сөнки был ҙур сығымдар талап итә һәм улар ошо халыҡ иненә төшкән хәлдә, ғәҙел нигеҙҙә уның ризаһыҙлығын тыуҙырһа һәм ихтилалға еткерһә, уны ҡоралды көс менән баҫтырырға тура киләсәк. Быны урынына Сухтелен линия хәүефһеҙлеген бында тамырлашып йәшәгән рустар аша тәьмин итеүҙе ышаныслыраҡ тип иҫәпләй, ә быны өсөн Ырымбур казак ғәскәрен көсәйтеү талап ителә; ошо маҡсатта губернатор линияла йәшәүсе һәм хеҙмәт итеүсе 4 пехота батальонын казак ғәскәре итеп үҙгәртеүҙе тәҡдим итә, сөнки йәйәүле ғәскәрҙән далала әллә ни файҙа булмай. Бында эске кантондарҙан казактарҙы, шулай уҡ өләшләтә Ырымбур һәм Сембер губерналарында йәшәүсе аҡ пахатлы (белопахатные - ер һөрөүсе. - **Тәрж. иҫк.**) һалдаттарҙың йәш ир балаларын күсереп килтереү тәҡдиме лә була; Ырымбур, Верхнеуральский, Силәбе һәм Троицк өйәҙҙәренең 4 кантоны башҡорттарын, иҫке положениеға ярашлы, ғәскәрҙә хеҙмәт итергә ҡалдырыу күҙаллана; Өфө, Пермь һәм Вятка губерналарында йәшәүсе ҡалған башҡорттарҙы һалым түләүселәр сословиеһына индереп, удел ведомстволарына буйһондорорға тәҡдим ителә, уделдар ошо ваҡытта үҙҙәренең идара итеү системаһы менән айырылып тороп, халыҡты ҡайғыртыусан була, һәм уларҙа һәләтлерәк чиновниктар хеҙмәт итә; башҡорттарҙы яңы халәткә күсереүҙе Пермь губернаһынан башларға уйлайҙар.

Был тәҡдимдәр махсус комитетта тикшерелә һәм батша ғали йәнәптәре тарафынан хуплана, әммә ошо дәүләт кешеһенең ваҡытһыҙ үлеме бер ни тиклем ваҡытҡа уның проекттарының ғәмәлгә ашырылыуын туҡтатып тора.

Граф Сухтелен тере сағында бер бик мөһим законлаштырыу акты ҡабул ителә: был батша ғали йәнәптәренең башҡорттарҙың үҙҙәре һис бер бәхәсһеҙ биләгән ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғын таныу хаҡындағы 1832 йылдың 10 апрелендәге указы. Указға ярашлы, улар ерҙәрен барса сословие кешеләренә һатыу йә иһә ҡуртымға биреү хоҡуғына эйә була, шул уҡ ваҡытта башҡорт аҫабалары ерҙәренә тәрлә шарттарҙа килешеүҙәр нигеҙендә припущенник булып килгәндәрҙе мотлаҡ рәүештә ер менән тәьмин итеү талап ителә; 7-се ревизия буйынса уларҙың иҫәбе 100 мең кешегә еткән.

Эске административ сараларҙан башҡа, граф Сухтелен рус булмағандарҙы уҡытыуҙы айырыуса әһәмиәтле тип иҫәпләй, был уларға рустар менән яҡынлашыу, уҡымышлы кешеләрҙең тормош маҡсатына уртаҡ ҡарашын үҙләштереү, фанатик мосолман руханиҙарының йоғонтоһо аҫтынан сығыу мөмкинлеген бирә. Медицинаға уҡытылған йәш мосолмандар үҙҙәре менән бер диндә булғандарҙы дауалай алыр, ә былары Ҡөрьәндә дөрөҫ аңламайынса, һәр саҡта барса нәмәгә ҡарата тик үҙ ҡараштарында ғына торған муллаларға һәм ишандарға ярҙам һорап мөрәжәғәт итә ине.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# АЛАҠАЕВТАР ХӨРМӘТЕНӘ



**Башҡортостандың Бүздәк районында яңы һәйкәл асыу тантанаһы уҙҙы. Элекке Яңы Богаҙы ауылы эргәһендә Алаҡай Туктаровҡа һәм уның тоҡомдары - Ҡаңлы ырыуы башҡорттарына бағышланған хәтер ташы барлыҡҡа килде.**

Шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары Алаҡаевтар хөрмәтенә мемориаль таҡтаташтар ҡуйылды. Митингыла тарихсы һәм журналист Салауат Хәмиҙуллин, Ырымбур казак ғәскәренең башҡортмишәр бүлеге атаманы, тыуған яҡты өйрәнеүсе һәм тәржемәсе Альберт Исмаил, шулай уҡ Алаҡай Туктаровтың тоҡомдары һәм уларҙың ғаиләләре ҡатнашты. Улар ташландыҡ зыяратты тәртипкә килтереп, ике таш урынлаштырҙы.

Башҡорт йөҙ башы Алаҡай Туктаров хәҙерге Бүздәк районының мөһим өлөшө булып торған Ҡаңлы улусы тормошонда әүҙем ҡатнашҡан. Уның ҡултамғаһын һәм тамғаһын Ҡаңлы башҡорттары еренә индереү тураһында күп кенә документтарҙа күрергә мөмкин. Алаҡай Туктаров улы Иксан Алаҡаев менән Торузин ауылында (хәҙерге Бүздәк) йәшәгән. Улар менән бергә бында Сыртлановтар, Кинйәкәевтәр һәм Бүздәк Ишембәтов көн иткән, артабан ауыл уның исемен йөрөтә башлаған. Уларҙың барыһы ла хәҙерге Бүздәк ауылына нигеҙ һалыусы тип иҫәпләнә. XIX быуат аҙағында уларҙың балалары Яңы Богаҙыға нигеҙ һалып, 1937 йылға тиклем шунда йәшәгән. Ҙур ташта Алаҡаевтар тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт бар. Бәләкәйерәк ташҡа Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан Алаҡаевтар хаҡында яҙылған.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

**Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында**

16- сы гвардия атлы дивизияһының 1945 йылдың 6 - 12 мартында Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһындағы боевой юлы боевой хәрәкәттәр журналында ҡыҫҡаса ошолай сағылдырылған: "1- 3 мартта дивизия, дошмандың ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәтеүен емереп, уның Штаргард, Линде, Реплин, Кремцов тораҡ пункттары районындағы мөһим терәк оборона пункттарын алды, дошман подразделениеларын ҙур юғалтыуҙарға дусар итте. 4 мартта дивизия, корпус штабы бойороғона ярашлы, Кремцов, Бралленти, Петцник маршруты буйынса барып,Фирцоль районында Ина йылғаһы аша сыҡты. Либбен, Батцвитц, Грайфенберг райондарында тупланып, яңы боевой бурыс алды: Грайфенберггың көньяҡ ҡырыйы -Фридрихсвилль- Батцвитц полосаһында, артабан Рега йылғаһының көнбайыш яры буйлап оборона тоторға (Балтик диңгеҙе буйында, Трептовтан төньяҡ-көнсығыштараҡ). 1945 йылдың 6 мартынан 12 мартына тиклем барған алыштарҙа яугирҙарыбыҙ дошмандың 700-гә тиклем һалдат һәм офицерын юҡ итте, 218-ен әсиргә алды. Алынған трофейҙар: Дееп ҡалаһынан көнсығыштараҡ хәрби ҡаласыҡтағы авиамастерскойҙар, прожектор установкалары - 20, электродвигателдәр - 12, автомашиналар - 50, зенит пушкалары - 18, боеприпас складтары - 7.

Имзалар: 16-сы гвардия атлы дивизияһының штаб начальнигы, гв. майоры И. И. Сарано; оператив бүлек начальнигы,гв. майоры Н. С. Бочко".

28 мартта 19-сы һәм 70-се армиялар Гдыня ҡалаһын - немецтарҙың эре хәрби диңгеҙ базаһын биләй. 2-се удар, 65-се һәм 49-сы армиялар 30 мартта Данциг ҡәлғә-ҡалаһын ала.

Гдыня һәм Данцигты азат итеү менән Көнсығыш Померания операцияһы тамамлана. 4 апрелдә 2-се немец армияһы ҡалдыҡтары беҙҙең 19-сы армия яугирҙары тарафынан тулыһынса тар-мар ителә һәм әсиргә алына. 10 марттан 4 апрелгә тиклем 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре дошмандың 63,6 меңләп һалдат һәм офицерын әсиргә ала, 680 танкыһын һәм штурм орудиеһын, 3,4 мең орудие һәм минометын, 431 самолетын, 277 карап һәм судноһын, башҡа бик күп хәрби техникаһын һәм мөлкәтен ҡулға төшөрә. Висла һәм Одер йылғалары арауығында, Балтик диңгеҙе яры буйындағы боронғо поляк ерҙәре дошмандан азат ителә. Немецтарҙың Көнсығыш Померания төркөмө тулыһынса тар-мар ителә.

Операцияла ҡатнашҡан ике фронт соединениеларының меңәрләгән яугирҙары ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнә. 16-сы Чернигов исемендәге Башҡорт гвардия атлы дивизияһының йөҙәрләгән яугирҙары ҡаһарманлыҡтары өсөн төрлө кимәлдәге наградаларға лайыҡ була.

7-се гв. атлы корпусының 1945 йылдың 31 мартындағы бойороғона ярашлы, I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән 148-се гв. артминполкының ут ввзводы командиры, гв. лейтенанты Климов Владимир Андреевич бүләкләнә. 11 февралдә Каллис ауылы янында орудиенан мәргән атып, дошмандың зенит батареяһын сафтан сығара; 16 февралдә Браллентин районында йөк тейәлгән 3 автомашинаны емертә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Мин Кәмәлек йылғаһы буйындағы башҡорттарға улар ҡымыҙ тип исемләгән, махсус рәүештә әсетелгән бейә һөтө менән дауаланырға йөрөнөм. Дуҫтарыма яҙған бер хатымда, башҡорттарҙан Геродотлыҡ аңҡый, тип тә белдергәйнем.*



# ҠАЛАЛЫ

## йәки Тарихи сығанаҡтар аша

**Ер йөҙөндә йәшәүсе йөҙәрләгән этностарҙың тарих төпкөлдәрендә боронғо ата-бабалары булған, әммә барыбер боронғо ҡәүемдәр менән бер рәттән, йәшерәктәре лә бар. Байтаҡ йылдар дауамында башҡорт халҡының формалаша башлауы осорон иң иртә тигәндә б.э. IX-X быуаттарына ҡайтарып ҡалдырҙылар. Әммә бөгөн башҡорттарҙың үтә боронғо ҡәүемдәрҙән хасил булыуын тарихсы-ғалимдар инҡар итмәй. Шуға күрә виртуаль тарихи ҡоробоҙ башында һүҙҙе хәҙерге замандан бик күп быуаттар элек йәшәгән һәм тарихи яҙмалары билдәле булған тарихсыларға һәм уларҙың хеҙмәттәрен өйрәнгән ғалимдарыбыҙға, башҡа күренекле шәхестәргә бирәйек.**

**Донъяның күп тарафтарында йәшәгән мәғлүмәтле ғалим-ғөләмәләр - Ҡытай хроникаларын төҙөүселәр, күп кенә ғәрәп сәйәхәтселәре, Урта һәм Кесе Азия, Европа авторҙары боронғо башҡорттар, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ йәшәгән тарафтар, уларҙың йәшәү рәүештәре, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре хаҡында байтаҡ ҡына мәғлүмәт ҡалдырған. Шуларҙың ҡайһы берҙәренә күҙ һалайыҡ әле...**

**Геродот, географ һәм тарихсы:** Мин Боронғо Грецияның Ғәликарнас ҡалаһынанмын, мине бәғзе бер ғалимдар "тарих атаһы" тип нарыҡланылар. Беҙҙең эраға тиклем V быуатта беҙҙә Рифей (һеҙҙә Урал) тауҙары тип аталған бейек кенә тау армыттарының көнбайыш һыртында йәшәгән будин һәм аргиппей ҡәүемдәре хаҡында яҙғайным: улар бейә һөтөн эсәләр, унан үҙҙәре иппәк тип йөрөткән сыр эшләйҙәр, һәм шулай уҡ бер емештең әсетелгән һутын эсәләр, ул асхи тип атала.

**Лев Толстой, күренекле рус яҙыусыһы:** Рустар әүәл Геродот иҫкә алған Рифей тауҙарын "Таш билғау" тип атаған. Ә уны башҡорттар бик боронғо замандарҙан бирле Урал тип йөрөткән. Мин Кәмәлек йылғаһы буйындағы башҡорттарға улар ҡымыҙ тип исемләгән, махсус рәүештә әсетелгән бейә һөтө менән дауаланырға йөрөнөм. Ошо үтә ихлас, киң күңелле һәм ҡунаҡсыл халыҡты оҡшата инем, улар араһында дуҫ-таныштарым күп булды. Дуҫтарыма яҙған бер хатымда, башҡорттарҙан Геродотлыҡ аңҡый, тип тә белдергәйнем.

**Жәлил Кейекбаев, күренекле башҡорт тел белгесе, филология фәндәре докторы, профессор:** Көньяҡ Уралда беҙҙең эраға тиклем үк зональ төрки теленең нигеҙе ярала, һәм бында һундар килгәнсегә тиклем төрки телле ҡәүемдәр йәшәй. Геродот иҫкә алған будин тигән ҡәбилә исеме боронғо төрки телендәге "будун", йәғни "халыҡ" тигәнгә тап килһә, "иппәк" башҡорт диалектарында осраған "ипмәк", йә иһә "икмәк" һүҙен хәтерләтә. Күрәһең, был һүҙ боронғо төрки телендә ашамлыҡтарҙы атау өсөн ҡулланылғандыр. "Асхи" һүҙе иһә емеш һутының "асыһы", йәғни "асы һыуы" тигәнде аңлатыуы бик мөмкин.

**Сергей Малов, боронғо төрки телдәре белгесе:** Башҡорт теле Көньяҡ Уралда һәм уға йәнәш ятҡан географик арауыҡтарҙа уның өсөн нигеҙ булған боронғо төрки теленән бик иртә (б.э. тиклем V быуаттан да һуң түгел) айырылып сығып, үҙаллы башҡорт-ҡыпсаҡ-мишәр төркөмөн хасил иткән, тип һығымта яһарға ерлек бар.

**Соломон Лурье, тарих һәм филология фәндәре докторы, профессор, антик донъя тарихы буйынса күренекле белгес:** Мин Сергей Маловтың, Жәлил Кейекбаевтың, Николай Аристовтың төрки ҡәбиләләренең тарихы, этник составы һәм тел үҙенсәлектәре буйынса ғилми тикшереүҙәре нигеҙендә Геродот аргиппейҙарының хәҙерге башҡорттар менән туранан-тура күп быуатлыҡ бәйләнеше булыуына инандым.

**Клавдий Птолемей, Мысырҙың Александрия ҡалаһында киң танылыу тапҡан ғалим:** Милäди буйынса икенсе быуатта астрономия, математика, география фәндәрен өйрәндем. Үҙ заманым кешеләре өсөн 8 китаптан торған географик ҡулланма төҙөнөм.



Дон һәм Ра (Волга) йылғалары арауығында көн иткән сармат-скиф ҡәбиләләренә ҡараған бер ҡәүемдең Пасиртай тип аталыуы хаҡында хәбәрҙар инем. Географик әҫәремдә миләди буйынса I быуатта йәшәгән ғалим Марин де Тур туплаған мәғлүмәттәрҙе ҡулландым.

**Ә.-З. Вәлиди Туған, Көнсығыш илдәре, төрки халыҡтары тарихы буйынса күп ғилми хеҙмәттәр авторы:** Эйе, бөйөк Птолемей, һеҙ иҫкә алған бер ҡәүемдең исеме булараҡ телгә алынған Пасиртай атамаһы башҡорт исеме булған кеүек, Волга һәм Урал буйҙарында йәшәгән ҡәүемдәрҙе аңлатыусы Гновивой, Табивой, Боровской исемдәре лә башҡорт ырыуҙары Ғәйнәне, Табынды, Борачты (Буржан-Барач+ан) күҙ уңында тота булһа кәрәк... Һеҙҙең икенсе бер әҫәрегеҙҙә тағы ла көнсығыштараҡ, Уралдың көньяғында йәшәүсе ҡәүем тип иҫкә алынған Савобнвой башҡорттар араһындағы ҡыпсаҡтарҙың бер өлөшөн тәшкил итеүсе суундарҙың исеменә яҡын. Шулай булғас, был төрки ҡәбиләләренең төп нигеҙен тәшкил иткән өлөштәре, миләди йыл иҫәбе буйынса беренсе-икенсе быуаттарҙа уҡ хәҙергә тиклем йәшәгән ерҙәрен, йәнә унан бер аҙ көнбайыш һәм көньяҡ тарафтарҙағы өлкәләрҙе биләүе хаҡында һығымта яһарға мөмкин.

Донъяның төрлө тарафтарында йәшәгән ғалимдар, сәйәхәтселәр ҡалдырған мәғлүмәттәр буйынса, 40-тан ашыу башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең үҙ тарихы бар, уларҙың бәғзеләре ғәрәп хәлифәттәрендә хәрби хеҙмәттә лә була, уларҙан ҡалған топонимдар Иранда, Кавказда, Каспий һәм Ҡара диңгеҙ буйҙарында, Дунай ярҙарында әлегә тиклем һаҡланып ҡалған. Тимәк, ата-бабаларыбыҙҙың үҙҙәренә генә хас цивилизацияһының, матди һәм рухи мәҙәниәтенең барлыҡҡа килеүен тарихи факт итеп ҡабул итергә етди ерлек бар.

**Нияз Мәжитов, билдәле тарихсы-археолог, академик:** Шәхсән үҙем Тарихи Башҡорт иле тарихын иң боронғо замандарҙан башлап өйрәнеүгә, күп йылдар дауамында археологик ҡаҙыныу эштәрен ойоштороуға барса ғүмеремде бирҙем. Көньяҡ Уралда таш быуат эпохаларынан бирле бер өҙлөкһөҙ билдәле бер ҡәбиләләр йәшәй, ваҡыттар үтеү менән улар көн иткән биләмәләргә Себерҙән, Алтай тарафтарынан, Урта Азиянан күскенсе ҡәбиләләрҙең килеп етә алыуы сер түгел - был боронғо кешеләрҙең ҡырағай аттарҙы эйәләштерә алыуы, ике тәгәрмәсле арбалар яһарға өйрәнеүе менән бәйле. Әлбиттә, бынан әллә нисә мең йыл әүәл Көньяҡ Уралда йәшәгән ҡәүемдәр үҙҙәрен нисек атағандыр, быны белеүе мөмкин түгел. Әммә тарих төпкөлдәренән күпме быуаттар үтмәһен, билдәле бер географик зонаны биләгән боронғо ҡәбиләләр тулыһынса юҡҡа сыҡмаған. Уларҙың вариҫтары күп эпохалар дауамында билдәле бер этностарҙы хасил итеүҙә ҡатнаша. Тап шуның өсөн Көньяҡ Уралда һуңғы ике мең ярым - ике мең йыллыҡта йәшәгән тарихи мәҙәниәттәр һәм хәҙерге башҡорт халҡының мәҙәниәте араһында туранан-тура бәйләнеш һәм күсәгилешлек булыуын бында күпләп табылған археологик артефакттар дәлилләй.

Тикшеренеүҙәребеҙ башында беҙҙең алда ауыр мәсьәлә тора ине. Башҡорттар, Рәсәйҙең бәғзе бер халыҡтары кеүек үк, ватан әҙәбиәтендә дөйөмләштерелгән тарихи тикшеренеүҙәрҙән мәхрүм ҡалды. Унан башҡа, Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттар тарихы систематик рәүештә тик һуңғы 60 - 70 йылда ғына өйрәнелә башланы, унда әлегә теүәл итеп асып булмаған "аҡ таптар" һәм бәхәсле моменттар ҙа күп әле.

Һуңғы 2,5 - 2 мең йылдарҙағы ҡәүемдәр тарихын бәйән иткәндә, беҙҙең инаныуыбыҙса, хәҙерге башҡорт халҡының алыҫ һәм яҡындағы ата-бабалары булған боронғо һәм урта быуаттар ҡәбиләләре иғтибарыбыҙ үҙәгендә булды. Үҙебеҙ ҙә көтмәгән бер хәләттә, башҡорт халҡының формалашыуы оҙайлы ваҡыттар дауамында барып, VI - X быуаттарҙың һәм уға тиклемге йөҙәр йыллыҡтарҙың ошо процестың айырып алғыһыҙ өлөшө булыуы хаҡындағы һығымтаға килдек.

**Ә бит хатта үҙебеҙҙең билдәле генә шәхестәребеҙҙең ҡайһылары боронғо ата-бабаларыбыҙ цивилизациялы ҡәүемдәр иҫәбенә инмәгән, ҡалалары ла булмаған, тип үкенес белдерә килде. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

**Нияз Мәжитов:** Бронза эпохаһында Көньяҡ Уралда тәү башлап яңы типтағы ҡомартҡылар - ур һәм оҙон соҡорҙар менән уратылып алынған ҡаласыҡ-ҡәлғәләр барлыҡҡа килә. Ошо типтағы ҡомартҡыларҙан иң тәүҙә Силәбе өлкәһенең көньяғында, Һынташты йылғаһы буйында Һынташты комплексы (ҡаласыҡ-ҡәлғә, ҡәберлек) ҡаҙып асылған (уны асыусы - күренекле совет археологы В.Ф. Генинг). Был беҙҙең Көньяҡ Урал зонаһы өсөн көтөлмәгән ҙур археологик асышҡа тиң булды.

**Геннадий Зданович, Силәбе дәүләт университеты ғалимдары менән Көньяҡ Урал территорияһында бронза быуаты ҡомартҡыһы - "Арҡайым" ҡаласығын тәүләп асыусы билдәле тарихсы-археолог:** Көньяҡ Уралда археологтар ҡаҙып асҡан ике тиҫтәнән ашыу ҡомартҡыға "Ҡалалар иле" тигән атама бирелде. Бында б.э. тиклем III - II мең йыллыҡтарҙа, йәғни бынан яҡынса дүрт мең йыл алдараҡ тап ошо зонала бронза быуаты ҡәбиләләре цивилизацияһы барлыҡҡа килгән. Тап ошо территорияла һуңынан меңдәрсә саҡрым ерҙәргә таралып киткән һинд-европа халыҡтарының ата-бабалары йәшәгән. Күп быуаттар үткәс, тап улар боронғо төрки, фин-уғыр, славян һәм башҡа Евразия этностары формалаша башлауында хәл иткес роль уйнаған, тип тә һығымта эшләргә мөмкин. Урал тауҙарының көнсығыш һырттарында урынлашҡан, яҡшы нығытылған тораҡтар төркөмө Гомер Трояһынан 5 - 6 быуатҡа боронғораҡ. "Ҡалалар иле" территорияһы төньяҡтан көньяҡҡа табан 350 саҡрым, көнбайыштан көнсығышҡа табан да шул тиклем арауыҡты биләй. Тап ошонда башҡа бөләкәйерәк ҡәлғә-ҡаласыҡтарҙан ҙурлығы менән айырылып торған ике ҡомартҡы - Һынташты һәм Арҡайым ҡаҙып асылды. Беҙ уларҙы ҡала тип атаныҡ, гәрсә улар хәҙерге ҡала төшөнсәһенә тап килмәһәләр ҙә. Әммә улар ҡәҙимге ҡәлғә-ҡаласыҡтар ҙа түгел: бында ҡеүәтле һаҡланыу ҡоролмалары төҙөлгән була, был ҡалаларҙың монументаль архитектураһы һәм ҡатмарлы коммуникациялар системаһы булыуы билдәле. Нығытылған үҙәк территорияһы айырым деталдәренә тиклем планлаштырылған, ул бик компактлы итеп төҙөлгән, бында бар нәмә лә төптән уйланып эшләнгән. Ҡала арауыҡтарын ойоштороу яғынан фекер йөрөтһәң, бында ҡала ғына түгел, ә һәр бер урыны, һәр мөйөшө үтә ҡәтғи рәүештә төҙәтөлгән, ҙур ҡоролмалары менән айырылып торған олуғ ҡала булыуына инанаһың. Был ҡалаларҙың архитектураһын хатта ҡатып ҡалған социум, тип әйтергә була: бындағы торлаҡтар, ҡорамдар, ритуаль арауыҡтар, ҡойолар системаһы, фортификация-оборона ҡоролмалары, туҡланыу урындары ошондай ҡалаларҙың цивилизация үҙәге булыуына етерлек дәлил.

**Нияз Мәжитов:** Донъя фәне Һынташты-Арҡайым төркөмө ҡомартҡыларын асыуҙы һәм тикшереүҙе, табылған материалдарҙы ғилми әйләнешкә индереүҙе Көньяҡ Уралдың боронғо тарихын өйрәнеү өлкәһендә өлгәшелгән оло ҡаҙаныш итеп таныны.

Арҡайым ҡаласыҡ-ҡәлғәһе Силәбе өлкәһендә, Сибай ҡалаһынан 60 - 70 саҡрым тирәһендә урынлашҡан. Ул бер-береһе эсенә индереп төҙөлгән ике һаҡ (оборона) ҡоролмалары ҡуласаһынан хасил булған, унда майҙаны 200 кв. метрға тиклем еткән торлаҡ биналары һәм цитадель була. Һаҡ ҡоролмалары стеналарының ҡалынлығы 4,5 - 6 м тәшкил итә. Тышҡы һәм эске һаҡ ҡоролмалары яндырылмаған кирбес, ағас һәм кәҫтән торған стеналар, шулай уҡ оҙон соҡор (канау) менән сикләнгән. Тышҡы һәм эске ҡәлғә стеналары арауығы тотошлайы менән 4х12м ҙурлығындағы ярым ер өйҙәрҙән тора. Өйҙәр радиаль йүнәлештә төҙәлөп, уларҙың ике оҙон стенаһы бер үк ваҡытта йәнәштәге бүлмәләрҙең дә стеналарын хасил иткән. Торлаҡ стеналары һәм ҡыйыҡтары ер иҙәнгә ҡаҙып ултыртылған бағаналар менән тотторолған. Һәр өйҙә ике инепсығып йөрөү урыны була. Береһе тышҡы стенаның бер мөйөшөндә булһа, икенсеһе киңлеге 6 м булған ағас мостовой менән тораштырылған эске ихата яғына сыға. Ағас түшәлгән урам (мостовой) аҫтынан канализация системаһы үтә. Өйҙәр иҙәндәге усаҡтар менән йылытыла; һәр бер өйҙә ҡойо, һыу ағыҙыу торбалары була. Хәҙер беҙ Көньяҡ Уралдың Арҡайым тибындағы ҡаласыҡ-ҡәлғәләре тирәләй иҙәндәрендә усаҡтары һәм тәрән ҡойолары булған дүрт мөйөшлө ярым ер өйҙәрҙән торған асыҡ

✓ *Эске басджирттарҙың ҡалаларынан Мастр һәм Ҡастрҙы атап була. Был ике ҡала ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр бында һирәк килә. Унда бер кемдең дә булғаны юҡ, сөнки урындағы халыҡ илдәре аша үтеп сығырға теләүселәрҙе үлтереп тора.*

# БАШҠОРТТАР,

## асылған хәҡиҡәт

тораҡтар булыуы хаҡында ышанысы итеп әйтә алабыҙ.

Көньяҡ Уралдың иртә бронза эпохаһына ҡараған ҡаласыҡ-ҡәлғәләрен тикшереү яңыраҡ башланғанлыҡтан, уларҙың барлыҡҡа килеүе һәм йәшәүе менән бәйле күп мәсьәләләр асыҡланмаған көйө ҡала. Әммә Арҡайым ҡаласығында оҙаҡ йылдар дауамында алып барылған ҡаҙыну эштәре материалдары бындағы ҡомартҡыларҙың үҙҙәренең түңәрәк планировкаһы, фортификацион һәм бәләкәй ҡоролмаларҙың ҡатмарлы булыуы, тәҙәлөштә яндырылмаған кирбестең киң ҡулланылыуы менән ғәҙәти булмауы хаҡындағы фекерҙе раҫларға нигеҙ була ала.

**▸ Ошо Арҡайым тибындағы ҡәлғә-ҡаласыҡтар бронза быуатында уҡ Көньяҡ Уралда билдәле бер цивилизация үҙәге булыуына дәлил. Уларҙың эҙһеҙ юҡҡа сығыуы мөмкин түгел. Ошо үҙәктең был территорияла артабан йәшәүен дауам итеүсе ҡәбиләләргә йогонтоһо булғандыр, тип фекер йөрөтөргә булалыр?**

**Нияз Мәжитов:** Көньяҡ Уралда Арҡайым тибындағы 20-гә яҡын ҡаласыҡ билдәле. Уларҙың береһе Баймаҡ районының Байыш ауылы янында урынлашҡан. Тикшеренеүселәр, Арҡайым тибындағы ҡомартҡылар төркөмөнөң планировкаһын, тәҙәлөшөн һәм барса табылған материалдарҙың үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, уны Һынташты археологик мәҙәниәте, тип нарыҡлайҙар һәм датаһын б.э. тиклем XX - XVI быуаттар арауығы менән билдәләйҙәр.

Ошондай ғәҙәти булмаған ҡомартҡыларҙың барлыҡҡа килеүе - төбәк халҡы йәшәйешенең барса өлкәләрендә барған тәрән үҙгәрештәр һөҙөмтәһе. Улар иң элгәре кешеләр йәшәгән урындарҙы һаҡлау мохтажлығы барлыҡҡа килеүен аңлата, бының ошо осорҙа төрлө ҡәбиләләр төркөмдәре араһында конфликттарҙың көсәйә барыуы менән бәйле булыуы бәхәсһеҙ. Арҡайым ҡаласығын асыусы археолог, профессор Г.Б. Здановичтың Көньяҡ Уралда ошондай типтағы ҡаласыҡтарҙың баҡыр мәғдәне ятҡылыҡтарын эшкәртеү рудниктарын дошман ҡәбиләләренән һаҡлау йәһәтенән терәк пункт ролен үтәүе, килтерелгән тауарҙарын урындағы ҡәбиләләр етештергән баҡыр әйберҙәргә, йәнлек тиреләренә һәм башҡа продукттарға алмаштырыу маҡсатында алыҫ илдәрҙән килеүсе сауҙагәрҙәр өсөн каруанһарай булыуы хаҡындағы фекерен ысынбарлыҡҡа тап килә, тип әйтеп була.

**▸ Ҡәлғә-ҡаласыҡтарҙа табылған ҡайһы бер артефакттарҙың, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүестәренең хәҙерге заманға тиклем һаҡланып ҡалыуын билдәләп үтергә кәрәктер?**

**Нияз Мәжитов:** Бура мәҙәниәте ҡәбиләләре тураһында яҙғанда, уларҙа сәсбау (сәсүрмә, сулпы) йәиһә түшелдерек сифатында ҡулланылған, бронза торбасыҡтар (пронизки) һәм пластиналарҙан яһалған биҙәүестәр комплексының киң таралыуына уҡыусыларҙың иғтибарын йүнәлткән инек. Һынташты ҡәберлегенән тағы ла байыраҡ бронза биҙәүестәр йыйылмаһы табылыуы беҙҙе яңынан ошо сюжетҡа кире ҡайтырға мәжбүр итә. Һынташтылағы ике ҡатын-ҡыҙ ҡәберендә, ҡалын күнгә беркетелеп, көмөш пластиналарҙан һәм торбасыҡтарҙан яһалған берәр зиннәтле түшелдерек табылған. Уларға иш булырлыҡ табылдыҡтар Көньяҡ Урал, Волга буйы һәм Ҡаҙағстандың бронза эпохаһына ҡараған ҡомартҡыларында күпләп осрай.

Бында ошо биҙәүестәр комплексының ҡатын-ҡыҙҙар ерләнгән ҡәберҙәрҙән табылыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Уйлауыбыҙса, ошо түшелдеректәр - башҡорттарҙа әлеге заманға тиклем массовый рәүештә һаҡланып ҡалған ҡатын-ҡыҙ күкрәксәләренең иң боронғо һәм сағыу прототибы ул. Сағыштырылған түшелдеректәр араһындағы конструктив оҡшашлыҡ беленеп тора, тик уларҙың айырмаһы хәҙерге башҡорт күкрәксәләрендә (башҡортса - яға, һаҡал) биҙәүес сифатында сәйлән, көмөш тәңкәләр йә иһә ябай пластиналар ҡуланылыуында ғына.

Конструкцияһы буйынса оҡшаш ҡатын-ҡыҙ түшелдеректәренең хәҙерге мариҙарҙа, сыуаштарҙа һәм Төньяҡ Евразияның башҡа халыҡтарында һаҡланып ҡалыуын һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк.

Беҙҙең бында сағылдырылған күҙәтеүҙәребеҙ дөрөҫ юҫыҡта бара икән, ғалимдарыбыҙ ҡарамағында ҡиммәтле сығанаҡҡа тиң материал барлыҡҡа киләсәк: ул Урал-Волга буйының бронза быуаты ҡәбиләләре мираҫының, үҙгәрә барып, ошо төбәк халыҡтарында хәҙерге заманға тиклем һаҡланып ҡалыуына дәлил булып тора. Был дала Евразияһы ҡәүемдәре, иң элгәре Көньяҡ Урал, Көньяҡ Себер, Урал-Волга буйы халыҡтары этногенезы башланғысының, шул иҫәптән хәҙерге башҡорттарҙың да, бронза быуаты ҡәбиләләренә барып тоташыуы хаҡындағы фекергә етерлек дәлил булып торасаҡ.

**▸ XII быуатта Сицилияның норман короле Рожер II һарайында йәшәгән гәрәп географы әл Иҙриси ул замандағы халыҡтар, уларҙың илдәре тураһында киң һәм бай мәғлүмәт туплап, "Донья гиҙеүҙе хушһынғанға йыуаныс" исемле энциклопедик характерҙағы ҙур хеҙмәт яҙа. Был китапта боронғо башҡорттар тураһында ла шаҡтай ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирелгән. Беҙҙең өсөн бына нимә мөһим: бынан 850 йыл элек һәм унан да әүәлерәк башҡорт халҡы Европала үҙ иле (территорияһы), хужалығы, ғәскәре, ҡалалары, үҙенсәлекле теле булған үҙаллы халыҡ рәүешендә билдәле була.**

**Әл Иҙриси:** Алтынсы климаттың етенсе секцияһында Хазар диңгеҙенең бер өлөшө, эске һәм тышҡы басджирт илдәренең территорияһы һәм уларға төньяҡтан сиктәш булған Аскутийа иле ерҙәре тураһында бәйән ителә. Тышҡы басджирттар иленә килгәндә, уға Ҡарукийа, Нәмджан һәм Гүрхан ҡалалары ҡарай. Был ҡалаларҙа йәшәүселәр, үҙҙәренә етерлек кимәлдә сауҙа һәм һөнәрселек менән шөғөлләнеп, үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Был илдәрҙең ерҙәре уңдырышлы, мул үсемлекле һәм мал көтөүҙәре күп.

Шулай уҡ тышҡы басджирттарҙан көнсығышҡа Нәмджан ҡалаһына тиклем һигеҙ көсем араһы. Нәмджан ҡалаһы - ҙур булмаған сәскә атыусы ҡаласыҡ. Уның менән төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә. Был ҡала Сукан тип аталған йылға буйында урынлашҡан. Был ҡаланан көнсығышта Арджика тауында баҡыр рудниктары бар, унда мендән ашыу кеше эшләй. Унда баҡыр күп табылып, Хуваразм еренә, Шаш иленә һәм гуз иленең яҡын өлкәләренә алып барыла. Был ҡаланан шулай уҡ төлкө һәм әл бабр тигән йәнлек тиреләре сығарыла, улар йылға буйлап Хазар диңгеҙенә тиклем алып барылып, бында һәм Дайламала юғары хаҡҡа һатыла. Был ҡалала балсыҡтан төрлө нәмәләр, шул иҫәптән юғары сифатлы һәм тиҙ ватылмай торған көршәктәр яһала. Был йылғаның ярҙарында төрлө төҫтәге ҡиммәтле таштар осрай, улар араһында лазурит күп. Был йылғалағы балыҡтарҙың сорттары һәм йыландарҙың төрҙәре шул тиклем күп, хатта уларҙың һөйләп тә, һанап та бөтөрлөк түгел. Нәмджан ҡалаһы кешеләре үҙҙәре өсөн төп аҙыҡ булған балыҡты бик ҙур таһыллыҡ һәм сослоҡ менән тота. Тотолған балыҡтың күберәк өлөшөн, һаҡлау өсөн тәмләткестәр һибеп, тоҙлап, ҡараптарға тейәп, Хазар диңгеҙенә алып төшәләр, яр буйлап Исил ҡалаһына һәм башҡа урындарға тиклем барып етеп, һатыу итәләр, йәиһә үҙҙәре теләгәнсә тотоналар.

Нәмджан ҡалаһынан Гүрханға тиклем һигеҙ көсем ер. Был Аскутийа ере төркиҙәренең күп халыҡлы ҙур ҡалаһы. Ул Табаристан диңгеҙенә ҡойған Исил йылғаһынан төньяҡ тарафта урынлашҡан. Ҡала яҡшы тәҙөкләндерелгән, тирә-яғы эшкәртелгән, бында ҡайһы саҡта күрһәтелгән йылға буйлап сауҙагәрҙәр һәм сәйәхәтселәр килеп йөрөй. Был илдә һөнәрселек тауарҙары һәм сәнғәт әйберҙәренән тик көнкүреш өсөн кәрәклеләрен генә эшләмәйҙәр, шулай уҡ улар яһаған эйәр һәм ҡоралдар шул тиклем күркәм һәм камил - бындайҙар төркиҙәрҙең башҡа бер илендә лә етештерелмәй. Гүрхан ҡалаһынан Ҡарукийаға тиклем Анхадара йылғаһы буйлап һигеҙ көнлөк юл, ә ҡоронан - көнбайышҡа табан ун алты көсем. Ҡарукийа - ағас ҡоролмаларҙан һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала. Уға ерҙәре бынан ун алты көсем арала булған булғарҙар йыш һөжүм итеп тора, һәм улар әлмисаҡтан бирле бер-береһе менән даими һуғышып йәшәй.

Ҡарукийа ҡалаһынан төньяҡка тышҡы басджирттарға тиклем үтеп сығыуы ауыр булған тауҙар, насар юлдар һәм тар һукмаҡтар буйлап ун көсем ара. Ҡарукийа һәм эске басджирттар араһы үтеп сыҡҡыһыҙ тауҙар һәм юлһыҙ ерҙәрҙән ун ике көсем. Басджирттарҙың иле ҙур, уның айырым өлөштәре бер-береһенән ҙур алыҫлыҡта ята. Эске басджирттар иле үҙәге менән тышҡы басджирттар иле үҙәге араһы ун бер көсем ер. Үҙенең гөрөф-ғәҙәттәре буйынса басджирт халҡы төркибулғарҙарға оҡшаш. Кейемдәре - оҙон куртка.

Эске басджирттарҙың ҡалаларынан Мастр һәм Ҡастрҙы атап була. Был ике ҡала ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр бында һирәк килә. Унда бер кемдең дә булғаны юҡ, сөнки урындағы халыҡ илдәре аша үтеп сығырға теләүсе бөтә сит ил кешеләрен үлтереп тора. Был ике ҡала Исилгә ҡойған йылға буйында урынлашҡан.

**▸ Быйыл Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө үҙенең 450 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Был хаҡта киң матбуғат сараларында күп яҙылды. Өфө ҡалаһы территорияһында урта быуаттар ҡомартҡылары - ҡәлғә-ҡаласыҡтар табылған. Уларҙың иң билдәлеһе - Өфө-II ҡаласығы. Ошо хаҡта һөйләп китһәгеҙ ине, Нияз Абдулхаҡ улы.**

**Нияз Мәжитов:** Өфө ҡалаһы үҙәгендә урынлашҡан Өфө-II ҡаласығын беҙ уны билдәле бер ихтималлыҡ кимәлендә Башҡорт ҡалаһы тип атайбыҙ. Ағиҙел йылғаһы буйындағы ошо исемле ҡала йыш ҡына Урта быуаттарға ҡараған сығанаҡтарҙа иҫкә алына. Төбәктә барған үҙгәрештәрҙең сағыу күрһәткесе - тимер, баҡыр һәм бронза металлургияһының сағыштырмаса юғары кимәлдә булыуы, был стандарт формалы һәм үлсәмле хеҙмәт һәм һуғыш ҡоралдарының, биҙәүестәрҙең бик киң таралыуынан беленә. Халыҡ тормошоноң барса өлкәләрендәге етди үҙгәрештәрҙең тағы бер күрһәткесе - ошо осорҙа Көньяҡ Уралдың әүәл кеше йәшәмәгән урманлы дала һәм дала зоналарында йөҙҙән ашыу ҡаласыҡтарҙың һәм тораҡтарҙың барлыҡҡа килеүе. Ҡомартҡыларҙың был төркөмө әлегә аҙ өйрәнелгән, әммә ҙур булмаған 5-10 ҡаласыҡтың монументаль оборона ҡоролмалары булған ҙур ҡаласыҡ тирәләй төркөм-төркөм булып урынлашыуы күҙгә ташланып тора. Был күләме яғынан ҙур булған ҡаласыҡтарҙың сәйәси, сауҙа-иҡтисади һәм мәҙәни тормош үҙәктәре булыуы, ә уларҙың ҡайһы берҙәренең ул саҡта уҡ ҡала статусына тиклем үҫешеп, иң һуңғы Урта быуаттарҙың яҙма сығанаҡтарында теркәлеп ҡуйылыуы бер ниндәй ҙә шик тыуҙырмай.

Улар иҫәбенә Өфө ҡалаһының Киров районындағы Өфө-II ҡаласығын индереү фарыз. IV-V быуаттарҙа ул хәҙерге "Дуҫлыҡ монументы" торған йылға морононда йәнәш урынлашҡан икенсе ҡаласыҡ менән берҙәм тарихи-археологик комплексты - ҙур тораҡ пунктын хасил иткән. Киңлеге 100 метр, оҙонлоғо 200 метрҙан артығыраҡ булған тар ғына моронадағы тораҡ та шул уҡ комплексҡа ингән (шартлы рәүештә Өфө-III тип йөрөтөлә), ул Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры һәм Өфө-II ҡаласығы сигендәге тәрән йырын араһында урынлашҡан. Морон Ырымбур күперенән 200 метрға өҫтәрәк Ағиҙел йылғаһына ҡойған инеш тамағында тамамлана. 60 йылдар уртаһына тиклем ошо моронда күп йортло урам була, әммә Ағиҙел аша һалына башлаған күпергә илтеүсе юлдар тәҙәү өсөн әлеге морон урамы менән бергә тулыһынса юҡҡа сығарыла.

Фән өсөн Өфө-II ҡаласығы асҡан крайҙы өйрәнеүсе П. Ф. Ищериков ошо морон территорияһында Өфө-II ҡаласығындағына тулыһынса оҡшаш булған бай керамика коллекцияһын йыйып өлгөрә. Морондоң үҙенсәлеге бында үҙаллы археологик ҡомартҡы булыуы хаҡында фараз итергә мөмкинлек бирә. Был комплекстан 1-2 саҡрым алыҫлыҡта тағы ла ошо осорға ҡараған өс ҡаласыҡ урынлашҡан: береһе "Йәшел саукалыҡ" санаторийы биләмәһендә, икенсеһе - Өфө йылғаһындағы (уның тамағында) "Таш кисеү" янында, ә өсөнсөһө - Салауат Юлаев һәйкәле торған моронда. Ағиҙел, Өфө йылғалары, Дим йылғаһының иҫке үҙәне буйындағы ҡаласыҡтар тирәһендә тиҫтәләгән асыҡ тораҡтар була, уларҙа, башлыса, V-XIV быуаттарға ҡараған керамик материал табылған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Боронғо тарихсылар Геродот һәм Птолемейҙың, XII быуат географы әл Иҙрисиҙең, тарихи хәҡиҡәтте ғилми тикшеренеү объекты итеп ҡабул иткән замандаш ғалимдарыбыҙҙың, тарихсы-археологтарыбыҙҙың башҡорт халҡының боронғо тарихын өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәре баһалап бөткөһөҙ. XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән күренекле башҡорт гуманист-ғалимы, билдәле дин әһеле Ризаитдин Фәхретдиновтың "Һәр бер халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш", тигән һүҙҙәренең ни тиклем хаҡлы икәненә төшөнәһең.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ**
**әҙерләне.**

✓ *Хоҙай ҡунаҡты беҙгә игелекле изге йән булған өсөн түгел, беҙҙең ихласлыҡ, изгелек, мәрхәмәтлек, сабырлыҡ, йомартлыҡ сифаттарын һынар өсөн илсе итеп ебәрә бит. Изгеһен дә, яуызын да берҙәй үк итеп ебәрә.*



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# ТӘБИҒӘТКӘ МӨНӘСӘБӘТЕҢ НИНДӘЙ?



**Бөтөн нәмә мөнәсәбәттән тора: тирә-йүнгә ниндәй күҙҙәр менән ҡарау беҙҙе бер-беребеҙҙән айыра, күрше-тирәгә, туғандарға, дуҫтарға ниндәй мөғәмәләлә булыуыбыҙ кемлегебеҙҙе сағылдыра.**

Мәҫәлән, ҡая башында яңғыҙ үҫкән дәү ҡарағасҡа ҡарап, берәү унда ғорурлыҡ образын күрер, икенсе берәү ҡарағайҙар ғаиләһенә ҡараған ылыҫлы ағастарҙың иң таралған тоҡомдарының береһе, тиер. Өсөнсө кеше был ағасҡа нисә йәш икән, тип, тарихы менән ҡыҙыҡһыныр. Ҡыҙғанысҡа күрә, был ҡарағасты йығып һатҡанда күпме килем булыр икән, тип, аҡса яғын ҡайғыртҡандар ҙа табылыр. Табылыр, заманы шундай - тирә-йүнде баһалауҙа аҡса күптән беренсе урынға сыҡты. "Деньги - это зло", тип тәрбиәләнгән беҙҙең быуынға бөгөнгө мөнәсәбәттәр бик ҡырағай тойола. Ҡырағай була инде, ҡырағай капитализм ҡиммәттәрен үҙ иткәс...

...Бер эшҡыуар, бөтөн мәшәҡәттәрен ситкә ҡуйып, ығы-зығынан ҡотолор өсөн кеше-маҙар әҙерәк йәшәгән ергә ял итергә киткән. Шәхси самолетында ул бер бәләкәй генә ауылға осоп килгән. Бер-ике көн ауыл халҡын күҙәтә торғас, башҡаларға ҡарағанда үҙен бәхетлерәк тойған балыҡсыға иғтибар иткән. Эшҡыуарға үҙенең был күҙәтеүе ҡыҙыҡ тойолған һәм ул балыҡсынан шәхси тормошо тураһында һорашҡан. "Иртән торғас, ҡатыным, балаларым менән иртәнге аш ашайым, шунан балалар мәктәпкә уҡырға китә, ә мин балыҡ ҡармаҡларға барам, ҡатыным сигеү сигергә ултыра", - тип яуап биргән балыҡсы. Бер-ике сәғәттә ғаиләһенә етерлек балыҡ тотҡас, ул, ҡайтып, әҙерәк серем итеп ала икән. Төштән һуң ҡатыны менән диңгеҙ яры буйлап йөрөп, ял итәләр, был ваҡытта балалары һыуҙа маз килә.

Эшҡыуар балыҡсының һөйләгәндәрен тыңлап, быға бик ныҡ аптыраған.

- Һин көн һайын ошо шөғөлөң менән йәшәйһеңме? - тип һораған ул.

- Ҡай саҡ икенсе эштәр ҙә килеп сыға, әммә күпселектә шулай йәшәйем, - тип яуап биргән балыҡсы.

- Артабан да көн һайын балыҡ тотасаҡһыңмы? - тип төпсөнгән эшҡыуар.

- Әлбиттә, бында балыҡ етерлек, - тигән балыҡсы.

- Кәрәк булһа, һин балыҡты күберәк тота алаһыңмы? - тип һаман төбәшкән эшҡыуар.

Балыҡсы быға ҡарап йылмайған да яуап биргән:

- Мин ни, йыш ҡына кәрәгенән күберәк тотам, әммә артығын кире ебәрәм. Белгегеҙ килһә, миңә балыҡ тотоу шул тиклем оҡшай.

- Шулай булғас, ниңә көнө буйына бик күп балыҡ тотмаҫҡа? - тип һораған бизнесмен. - Һин бит балыҡ һатып, әллә күпме аҡса эшләй алаһың. Яңынан ҙурыраҡ кәмә алыр инең, шунан икенсеһен, өсөнсөһөн. Балыҡ тотор өсөн кешеләр яллаһаң, үҙ бизнесың барлыҡҡа килер, ҡалала ғына йәшәрһең. Мин әйтте, тиерһең, берәй ун йылдан балыҡ һатыу буйынса халыҡ-ара кимәлгә сығасаҡһың.

Балыҡсы тағы ла йылмайған:

- Ә ни өсөн кәрәк ул миңә?

- Нисек инде, ни өсөн! Аҡса өсөн, - тип аптыраған эшҡыуар. - Шулайтып күп аҡса туплағас, рәхәтләнеп ял итерһең.

- Улайһа, ял иткәндә ни менән шөғөлләнәсәкмен? - тип, йылмайып һораған балыҡсы.

- Йәнең ни теләй, шуның менән! - тип ҡысҡырып ебәргән эшҡыуар.

- Мәҫәлән, ғаиләм менән тәмле аштар ашар инекме?

- Әлбиттә, һис шикһеҙ, - тип иҫе киткән эшҡыуар, сөнки уның әйткәндәре балыҡсыға тамсы ла тәьҫир итмәгән.

- Көн һайын рәхәтләнеп балыҡ тотор инемме? - тип тағы һораған балыҡсы.

- Әлбиттә, шулай буласаҡ, - тип ризалашҡан эшҡыуар. - Тик ул ваҡытҡа бындағы балыҡ әлеге кеүек күп булмаҫ.

- Ул саҡта мин ҡатыным менән диңгеҙ яры буйлап бер уйһыҙ йөрөр инекме, балаларыбыҙ һыуҙа маз килерҙәр инеме? - тип ҡыҙыҡһынған балыҡсы.

- Һис шикһеҙ, ни теләһәң, шуны эшләр инең! Тик ул ваҡытҡа балаларың да үҫеп етерҙәр, - тип һығымта яһаған эшҡыуар.

Балыҡсы тағы ла киңерәк йылмайып, әңгәмәсеһенең ҡулын ҡыҫҡан һәм:

- Әле әйткәндәр миндә бөгөн үк бар! - тигән шат йылмайып.

**Шулай итеп...**

Ҡаяла яңғыҙ үҫкән ҡарағас күрһәгеҙ, башығыҙға иң тәүҙә ниндәй уй килә? Был һеҙҙең тирә-йүнгә мөнәсәбәтегеҙҙе сағылдыра. Тәбиғәткә ҡарата булған мөнәсәбәт кешеләргә ҡарата ла шул уҡ икәнен онотмайыҡ.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ҠУНАҠЛАШЫУ БИТ УЛ...

## ихласлыҡ, эскерһеҙлек мәктәбе

**Бер саҡ гәзитебеҙҙә Бөрйән районынан Гөлсөм Өмөтбаева атлы автор халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығы хаҡында һүҙ алып барып, ҡунаҡты күстәнәс биреп оҙатыуҙың әһәмиәтен шулай тип аңлатҡайны: "Күстәнәс - ҡунаҡтан ҡайтып инеү менән өйҙә ҡалған бала-сағаға тоттороп, уларҙың ҡыуанысын күреү, ҡунаҡ табынының ризығын өйҙәгеләргә лә татытыу, ҡунаҡ саҡырған кешенең ихласлығын сағылдырыу ул..." Яҙмаларының икенсе өлөшөндә автор ауыл-ҡала мөнәсәбәтенең сәйер күренешен бәйән итеп, ҡасандыр ауылда ҡунаҡ булыусы ҡала кешеһенең үҙен ҡунаҡ итеүсене ҡала урамында осратҡанында күрмәмешкә һалышып үтеүе, ашап-эсеүен, ҡунаҡ булыуын тиҙ онотоуы хаҡында әйтеп үтә. Бик хаҡ һүҙҙәр. Был йәһәттән минең дә бер күҙәтеүем бар: ҡалалар ҙурыраҡ, мегаполис киңерәк булған һайын, унда йәшәүселәрҙең дә күңеле тарыраҡ була бара, йәғни мөхит ни тиклем киңәйһә, кеше үҙ-үҙенә шул тиклем нығыраҡ бикләнә. Ҡыҫҡаһы, ҡунаҡ, ҡунаҡлашыу, ҡунаҡсыллыҡ хаҡында киңерәк итеп фекер йөрөтөп ҡарайыҡ...**

### Мәҡәл-әйтемдәребеҙҙә...



Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре араһында ҡунаҡ, ҡунаҡлашыу, ҡунаҡсыллыҡ хаҡындағылары иң күптәренең береһен тәшкил итә, тиһәм, һис тә яңылышмам. Уларҙың бер нисәүһен әйтеп үтергә лә булалыр, әйтәйек: "Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар", "Ҡунаҡ барҙа этеңде лә орошма", "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул", "Ҡунаҡ килһә, ит бешә, ит бешмәһә, бит бешә", "Ҡунаҡ килһә - мәшәҡәт, үҙең барһаң - эрәхәт", "Ҡунаҡ килһә, һый килә", "Ҡунаҡ ҡунаҡтан оло", "Ҡунаҡ үҙ ризығы менән килер", "Ҡунаҡ - хужаның ишәге", "Ҡунаҡҡа барһаң, ҡаҙаныңды йыуып кит", "Ҡунаҡтың аты ла ҡунаҡ", "Ҡәҙерле ҡунаҡ һағындырып килә", "Бәхетленең ҡунағы бергә", "Ҡунаҡ менән әжәл һорап килмәҫ", "Ҡыҙ бала ҡунаҡ ҡына", "Саҡырып ҡунағың килмәһә, ҡыйын, ауырып ҡатының үлмәһә, ҡыйын", "Үлем - һәр кешенең ҡунағы", "Әҙәпле ҡунаҡ китер ваҡытын үҙе белер", "Оялсан ҡунаҡ ас ҡалыр", "Өс көн - ҡунаҡ, өс көндән һуң - муйнаҡ", "Саҡырылмаған ҡунаҡ - юнмаған таяҡ", "Саҡырылмаған ҡунаҡ уғрынан яман", "Төнгө ҡунаҡ - төнлөк ябыуы", "Хужа ҡунағын яратмаһа, бесәйен әрләй", "Һөмһөҙ ҡунаҡ ҡуна ҡалыр, хужаларға нужа һалыр" һ.б.

Күреүебеҙсә, ҡунаҡ, ҡунаҡлашыу, ҡунаҡсыллыҡ хаҡында төрлө-төрлө характерҙағы мәҡәл-әйтемдәр бихисап икән. Бында әле мин "Башҡорт халыҡ ижады"ның X томындағы ("Китап", 2006 йыл) мәҡәл-әйтемдәрҙең иң аҙ өлөшөн генә миҫал итеп килтерҙем. Миңә ҡалһа, был хаҡтағы ҡанатлы һүҙҙәр араһындағыларының иң кәттәләре, моғайын да, "Ҡунаҡ - Хоҙай илсеһе", "Беҙ был донъяла ҡунаҡ ҡына" тигәндәрелер. Тик, ниңәлер, халыҡ араһында киң таралған был әйтемдәр томлыҡҡа инмәй ҡалған. Бәлки, улар китаптың башҡа тематик бүлектәрендә урын алғандыр, тип ышанғы килә.

### Ҡыҙыҡ сифатмы?

Борон-борондан ҡунаҡсыллыҡ барлыҡ халыҡтарҙа ла иң күркәм йола һаналған. Татлы ризыҡ, аш-һыуҙан һығылып торған мул табын бар кешегә оҡшаған кеүек, ҡунаҡсыллыҡ сифаты ла һәр кеше өсөн яҡындыр, кешелеклелек, изгелек, мәрхәмәтлек, йомартлыҡ сифаттары менән бер тигеҙ итеп баһаланалыр, тип ышанғы килә. Әммә һәр бер ҡунаҡтың да Хоҙай илсеһеләй изге йән булмауы ла бар бит әле. Нимә генә тимә, ҡунаҡтарҙың да төрлөһө була. Улай булғас, ниңә ҡунаҡтарҙы Хоҙай илсеһенә тиңләгәндәр һуң? Был урында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың бер исемһеҙ шиғырынан ошо юлдарҙы килтереп үтке килә:

*Боронғоноң йолалары ҡыҙыҡ:*
*Изге булған ҡунаҡ ул саҡта.*
*Хатта дошман өйгә килеп керһә,*
*Теймәгәндәр ундай ҡунаҡҡа.*
*Бары менән уны һыйлағандар,*
*Һоло килтергәндәр атына.*
*Тик ауылдан ҡунаҡ сығыу менән*
*Ир-егеттәр, яҡшы атҡа менеп,*
*Ҡыуа төшкән дошман артынан...*

Бер яҡтан ҡарағанда, кешене ике йөҙлө, яһалма рәүештә яғымлы, игелекле булырға мәжбүр итеүҙе хәтерләткән кеүек ҡунаҡсыллыҡтың был йолаһы. Ә бит ҡунаҡсыллыҡтың нигеҙендә өйөңә ҡунаҡ булып килгән һәр кешегә ҡарата йылы, яҡты, йомарт мөнәсәбәт күрһәтеү ята. Әгәр ҙә ҡунағың ундай мөнәсәбәткә лайыҡ булмаһа, йәғни дошманың булһа, ни эшләргә һуң? Уға яҡты йөҙ күрһәтеү, атының теҙгененән алып ҡаршылап, түреңә мендереп ултыртып һыйлау бер ҡатлылыҡты, үҙ булмышыңа, асылыңа, яҙмышыңа ҡарата битарафлыҡты, үҙеңә зыян булып әйләнеп ҡайтырға булышлыҡ иткән хушкүңеллелекте аңлатмаймы? Халҡыбыҙҙың бындай сифатын хәҙерге заманда ыштанһыҙлыҡҡа, вайымһыҙлыҡҡа тиңләүселәр ҙә бар. Йәнәһе, ауыҙын асһа, үпкәһе күренеп торған бер ҡатлы башҡорт һаман да ҡунағының алдына барлыҡ мөлкәтен сығарып, нисек булһа ла уны һыйлап, күңелен күреп ҡалырға тырыша...

Беҙҙең халыҡта ҡунаҡҡа бындай мөнәсәбәт ҡунаҡтың үҙенә түгел, Хоҙайға тоғро булғаныбыҙ өсөн һаҡланып килəлер, тип ышанғы килә барыбер ҙә. Ысынлап та, ни өсөн ҡунаҡ Хоҙайҙың илсеһе һуң? Хоҙай ҡунаҡты беҙгә игелекле изге йән булған өсөн түгел, беҙҙең ихласлыҡ, изгелек, мәрхәмәтлек, сабырлыҡ, йомартлыҡ сифаттарын һынар өсөн илсе итеп ебәрә бит. Изгеһен дә, яуызын да берҙәй үк итеп ебәрә. Ошо юл менән беҙҙе һынай һәм сауабын да бирә. Мин, мәҫәлән, халҡыбыҙ ҡунаҡсыллығының дәлил менән аңлатып булмаҫлыҡ сәбәптәрен ошонда күрәм. "Ҡунаҡ - Хоҙай илсеһе" тигән

әйтем тап ошо хаҡталыр, тием. Яңылыш уйлаһам, зинһар, мине төҙәтегеҙ.

## Ҡунаҡ - ҡуна килеүсе

Улай булғас, "Саҡырылмаған ҡунаҡ угрынан яман", "Төнгө ҡунаҡ - төнлөк ябыуы", "Хужа ҡунағын яратмаһа, бесәйен әрләй", "Һөмһөҙ ҡунаҡ ҡуна ҡалыр, хужаларға нужа һалыр" тигән әйтемдәрҙе нисек аңлатырға була, тип әйтер бәрәү. Кем белә, бәлки, был әйтемдәрҙе ҡунаҡлашыуҙы, ҡунаҡ итеүҙе яратмағандар уйлап сығарғандыр. Нимә генә тимә, "ҡунаҡ" һүҙенең тамырында "ҡун", "ҡуныу" йәғни "йоҡлап сығыу" һүҙҙәре ята. Ҡунаҡ ул иң беренсе нәүбәттә ҡуна килеүсе кеше. Беҙ бәләкәй саҡта атай-әсәйҙәрҙең нисек итеп ҡунаҡ саҡырышып, гөрләшеп йәшәүҙәрен күреп үҫтек. Әйтәйек, бер ауылда бер өй аша ғына йәшәгән егет менән ҡыҙ өйләнешһә, тәүҙә әйттерергә килеп, өс көн буйына ҡунаҡ була инеләр, мал алырға килгәндә лә өс көн буйы ҡунаҡлашалар. Туйҙар дүрт көн бара: тәүге көн - ҡыҙыл туй, икенсе көн - йыуаса, өсөнсө көн - сыбырҡы ите, дүртенсе көн - ҡыҙ оҙатыу һәм кейәү йортонда ҡыҙ ҡаршылау. Шулай итеп, егет менән ҡыҙҙың өйләнешеү мәшәҡәттәре ун көнгә һуҙыла торғайны. Шуныһы ҡыҙыҡ: ҡунаҡ булып килеүселәрҙе, бер өй аша ғына йәшәһәләр ҙә, өйөнә ҡайтып килергә лә юл ҡуймай инеләр. Хәҙер инде, заман башҡа, заң башҡа, ҡайһы бер туйҙар иң күбендә 1-2 көндә тамамлана. Беҙ, малайҙар иһә, апайҙарыбыҙҙың туйына килгән ҡоҙаларҙың атын ҡарау, һуғарыу, бесән, һоло һалыу менән булдыҡ. Ҡунаҡтың йәки ҡоҙаның аты ихатаға инеүе була, хужаның аты ялан кәртәгә сығарылып, әүеҫлек аҫтына индерелеп ҡуйыла, септә лә ҡунаҡтың атына ябыла ине. Ҡунаҡтың аты ла ҡунаҡ ине шул ул заманда.

## Ә ризыҡтар һуң!

Хәҙер ҡунаҡ саҡырғанда ризыҡтарҙың ниндәйе генә әҙерләнмәй! Ҡош һөтөнән башҡаһы бар, тиҙәр ундай өҫтәлдәрҙе. Шул өҫтәлдәргә күҙ һалып ҡына ла йәшәү кимәлебеҙҙең ни тиклем күтәрелгәнен тоҫмалларға була бит. Тормош насар, тип зарланыусылар бынан 20-30, 40-50 йыл элекке байрам табындарына күҙ һалып, хәҙерге менән сағыштырһын ине. Әммә табындар мулыраҡ була барған һайын, кешеләр ҡунаҡҡа һирәгерәк саҡырыша башланы. Ҡунаҡҡа кеше саҡырыуҙар ҙа күберәк әшнәлек, иҫәп принцибына ҡоролғанына шаһит булырға тура килә хәҙер.

## Ҡара-ҡаршы саҡырыу

Тағы ла ҡунаҡ саҡырышыуҙың "Ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы" тигән йолаһы ла бар. Был йола буйынса ҡунаҡта булыусы мотлаҡ рәүештә үҙен ҡунаҡ итеүсегә яуап биреп, ҡайтарып саҡырып, ҡунаҡ итергә тейеш. Тейеш кенә түгел, бурыслы. Әгәр ҙә бурыс үтәлмәһә, был беҙҙең халыҡ өсөн оло ғәрлек һанала. Шул уҡ ваҡытта ҡайтарып ҡунаҡ саҡырғанда тәүге мәжлестә булыусыларҙың барыһы ла саҡырыла. Ҡунаҡлашыуҙың былдай үҙенсәлекле "түңәрәге" хәҙерге ваҡытта һуғыш ашына, Ураҙа ваҡытында ауыҙ асыуға саҡырғанда һаҡланып ҡалған. Былдай саҡырышыуҙарҙа туғандар ҙа, шулай уҡ туған булмаған ауылдаштар, бер урында эшләүсе коллегалар йә күршеләр ҡатнаша. Алыҫтан килгән ҡәҙерле ҡунаҡ янына алып саҡырыуҙы "ҡунаҡ янына алыу" тип атайҙар. Ә инде ҡунаҡ янына алынған кеше ҡайтарып барыһын ҡунаҡҡа саҡырһа, быны беҙҙең яҡта "тауыш итеү" тиҙәр. Әсәйемдең "шуларҙы-шуларҙы тауыш итеп алайыҡ", тип атайым менән кәңәшләшкәндәре әле булһын хәтеремдә. Тауыш итешеүҙең үҙенә күрә айырым күркәм бүләк бирешеү миҙгелдәре лә була торғайны. Был осраҡта тауыш итеп ҡунаҡ йыйыусы алыҫтан килгән ҡәҙерле ҡунаҡҡа хөрмәт билдәһе итеп күлдәк кейҙерә. Беҙҙең яҡта "күлдәк кейҙереү" йолаһы кейем кейҙереү, бүләк биреү буларак ҡына аңлашылмай, "шатлыҡ бүләк итеү", "шатлыҡ күлдәге кейҙереү" буларак та аңлашыла. Йәғни өҫтөнә яңы, сағыу матур күлдәкте кейгән кеше үҙенә килешле булған кейемдән яңы сүрәткә инеп ҡыуана, быға тиклем үҙенә танһыҡ булып тойолған шатлыҡ минуттары кисерә булып сыға. Шуға күрә яңы, матур күлдәк кейеү шатланыуға, ҡыуаныуға бәрәбәрҙер. Әйтәйек, "атҡа менгәндәй ҡыуанды" тигән һымаҡ. Тап шуның өсөн дә ҡунаҡҡа күлдәк кейҙереү иң ҙур бүләк биреү булып иҫәпләнә лә инде. Күлдәктән дә ҡиммәтерәк булған башҡа бүләк биреү ул тиклем үк баһаланмай беҙҙең яҡтарҙа. Ололарҙың "шуларҙа-шуларҙа булдым, күлдәк кейеп ҡайттым", тигәнен беҙҙең яҡта "ҡыуанып-шатланып ҡайттым" йәки "быуаса кисермәгән кинәнес кисерҙем", тип тә аңларға була.

## Берҙәм итеүсе сара

Ҡунаҡлашыуҙың былдай күркәм йолалары юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгәндер тип уйланыла. Туғандарҙың да, бер-береһенә туған булмаған ете-яҡтарҙың да саҡырышып йәшәүе халҡыбыҙҙы берләштереүсе, берҙәм итеүсе бер сара ла булғанын төҫмөрләргә була бында. Һәр хәлдә, йортонда булып, түрендә ултырып, ризығынан ауыҙ иткән кеше менән насар мөнәсәбәттә булырға тырышмайһың бит инде. Әсәйҙәребеҙҙең "ауылдағы ана шуларҙы, бына быларҙы ҡунаҡҡа саҡырғаныбыҙ юҡ, хатта оят булып китте", тип ҡунаҡҡа саҡырыры ниәтләнеп ултырғандары ла хәтерҙә. Ана шундай табындарҙа беҙ белгәндән генә әсәйебеҙ әллә күпме апайҙарға, инәйҙәргә шатлыҡ күлдәге кейҙереп, үҙенә ҡиәмәтлек апаһын йә һеңлеһен, атайыбыҙға ҡиәмәтлек бажалар, беҙгә ҡиәмәтлек еҙнәйҙәр, олатайҙар тапты. Ҡиәмәтлек ҡунаҡлашыу аша туғанлашыу иң күркәм йола һанала беҙҙә. Тимәк, ҡунаҡлашыу халҡыбыҙҙың үҙенсәлекле ойошоу, берләшеү формаһы булғаны бында бәхәсһеҙ хәҡиҡәт булып тора. Өҫтәүенә, башҡорт өсөн ҡунаҡ Хоҙай илсеһенә тиңләнә икән, ҡунаҡсыллыҡ, һис шикһеҙ, Хаҡ Тәғәлә алдындағы иң сауаплы ғәмәлдәрҙән һаналыуы көн кеүек асыҡ.

## Тыйнаҡлыҡ та кәрәк!

Талантлы шағир, үҙенсәлекле ҡарашлы ғалим, олойән шәхес, мәрхүм Рәшит Әхтәриҙең ҡунаҡ булыу хаҡында шундайыраҡ шиғыр юлдары бар ине:

*Әй буйында йәй буйына*
*Ҡунаҡ булырға ине.*
*Ҡунаҡ булырға ине лә,*
*Тыйнаҡ булырға ине.*

*Әй буйында йәй буйына*
*Ҡунаҡ булып булманы.*
*Ҡунаҡ булып булһа ла бит,*
*Тыйнаҡ булып булманы.*

Ҡунаҡтың тыйнаҡлыҡ зарурлығы хаҡында ла күпте һөйләргә булыр ине. Һүҙҙе оҙонға һуҙмайынса, "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул", "Өс көн - ҡунаҡ, өс көндән һуң - муйнаҡ" тигән әйтемдәрҙе генә килтереп үтәйек. Нимә генә тимә, Хоҙай әҙәм балаһын ҡунаҡ итеп тә һынай, рәхмәтлеләр менән рәхмәтһеҙҙәрҙе лә айыра. Юҡҡа ғынамы ни, рәхмәтле булыу әҙәм балаһы өсөн иң оло сауаптарҙан һанала. Рәхмәтле булыу ғына түгел, рәхмәт әйтә белеү ҙә оло сауап. Еребеҙгә ҡунаҡ ҡына булып килеп, һыйланып, һуңынан йәҙәбәҙгә төкөрөргә тырышыусыларҙы ла яҡшы беләбеҙ. Ундайҙар хатта ҡунаҡ роленән хужаға күсергә лә маташа. Был йәһәттән Хоҙай беҙҙең менән...

## Күстәнәс биреү мотлаҡ!

Яңыраҡ отпускым ваҡытында мин тыуҙалған ауылдан 32 саҡрым алыҫтағы ауылда йәшәүсе дуҫым мине кис ҡояш байығас үтәсәк күркәм сараға саҡырҙы. Беҙ бәләкәйҙән шуға күнеккәнбеҙ: ҡайҙа барһаҡ та, күстәнәсһеҙ йөрөмәйбеҙ. Сара дуҫымдың йортонда түгел, башҡа урында үтте һәм шулай килеп сыҡты: мин төнгә сәғәт берҙә генә уның йорто янынан ҡайтыр яҡҡа ҡуҙғалдым. Тик шул саҡта ғына уның ғаиләһенә тигән күстәнәсте дуҫымдың ҡулына тоттороп ҡайтырға сыҡтым. Һәм нимә булды, тиһегеҙме? Иртәгәһен, уттай ҡыҙыу эш ваҡытында, юҡ һылтауҙы бар итеп, дуҫым күстәнәсен тотоп минең янға килеп етә лә һалған. "Уңайһыҙландым, төнө буйы йоҡлай алмай сыҡтым", ти үҙе.

Күстәнәс, бүләк биреү "Хоҙайға ҡайтыу" китабында түбәндәгесә аңлатыла: "Нимәлер биреү, алыу (күстәнәс, бүләк, әйбер, хоҡуҡ һ.б.) өсөн энергияның туҡтауһыҙ хәрәкәте талап ителә..." Икенсе төрлө әйткәндә, нимәлер алыр өсөн иң тәүҙә нимәлер бирергә кәрәк, йәғни энергияның хәрәкәте генә артабанғы хәрәкәтте тәшкил итә. Урыҫтар был саҡта "Буш сыр тәпелә генә була", тиһә, башҡорттар "Буштың атаһы үлгән", ти. Тимәк, ҡунағына күстәнәс биреп ҡайтарыусы хужа был ғәмәле менән үҙенә лә күстәнәс, бүләк, рәхмәт, сауап булып ҡайтасаҡ изгелек энергияһын хәрәкәткә килтерә, йәғни изгелек, мәрхәмәтлек мөхите, түңәрәге барлыҡҡа килтерә. Ҡунаҡҡа биреп ҡайтарылған тәмле күстәнәс, танһыҡ ризыҡ, әлбиттә, уның йортонда ҡалған балаларына тәғәйенләнә. Тимәк, уны ауыҙ итеп һөйөнгән балаларҙың шатлығынан килгән сауабы ла үҙе ни тора.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ҡунаҡлашыуҙы ихласлыҡ, эскерһеҙлек мәктәбе тип атарға ла булалыр. Ә бит тормош кешеләрҙе, бигерәк тә яҡын туғандарҙы бер-береһен күрә алмаҫтай мөнәсәбәтле хәлдәргә лә ҡуя. Ошондай саҡтарҙа йортона Хоҙайҙың илсеһе булып килеп ингән ҡунағына бөтөнләй башҡа күҙлектән ҡарайһың да инде.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# МАТУРЛЫҠ БӘЙГЕҺЕНДӘ...

**"Мисс Республика-2024" конкурсы еңеүсеһе Радмила Әсфәндийәрова (һүрәттә) илебеҙҙең "Мисс Рәсәй-2024" гүзәллек конкурсында Башҡортостан исеменән сығыш яһаны.**



Конкурсҡа 85 мең ғариза ҡабул ителгән һәм 50-һе генә гүзәллек проекты финалына сыҡҡан. 16 сентябрҙә башланған конкурс 5 октябрҙә Мәскәүҙә сағыу шоу менән тамамланған. Өс аҙна буйына ҡыҙҙар фотоға һәм видеоға төшә, шулай уҡ дефиле буйынса дәрестәр, осрашыуҙар, экскурсиялар, оҫталыҡ дәрестәре ойошторола. Милли кейем күрһәтеү һәм республика менән таныштырыу этабында Радмила "Ағиҙел" предприятиеһында тегелгән костюмда сығыш яһап, еңеп сыҡты. Шулай уҡ таланттар конкурсында һәм шәфҡәтлек проектында ҡатнашыу этаптарында ла һынатманы. Һөҙөмтәлә ҡыҙ "Мисс Рәсәй-2024" конкурсының топ-20 исемлегенә инде.

Радмилаға 23 йәш, Ғафури районында тыуып үҫкән. Өфө фән һәм технологиялар университетын тамамлаған. Стретчинг буйынса педагог, моделинг һәм хореография менән мауыға. "Атмосфера" коллективы составында "Студент яҙы" призеры, шулай уҡ "Мисс УУНИТ-2023" конкурсы еңеүсеһе. Бер йылдан ашыу "Luna Models" модель агентлығында шөғөлләнә. Киләсәктә ныҡлы ғаилә ҡороп, һөнәре буйынса эшләргә хыяллана.

**Әйткәндәй...**

Ҡытайҙың Шанхай ҡалаһында кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙар араһында "Азия королеваһы-2024" халыҡ-ара матурлыҡ конкурсы уҙҙы. Унда Көньяҡ Корея, Япония, Малайзия, Индонезия, Һиндостан, Ҡытай, Монголия, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан һәм башҡа илдәрҙең вәкилдәре ҡатнашты. Рәсәй исеменән конкурста "Башҡортостан һылыукайы-2023" Луиза Эшрокова сығыш яһаны. Уға 34 йәш, 9 йәшлек ул тәрбиәләй, сығышы менән Салауат ҡалаһынан. Луиза Гран-при яуланы (абсолют еңеүсе). "Таж беҙҙә, Рәсәйҙә. Ҡытайҙа минең беренсе халыҡ-ара конкурсым шәп һөҙөмтә бирҙе, - тип яҙҙы модель "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге сәхифәһендә. - Был еңелдән булманы, әммә матур, мәңге онотолмаҫ хис-тойғолар ҡалдырҙы. Яңы илде күрәүем, донъяның төрлө мөйөштәренән килгән кешеләр менән танышыуым менән бәхетлемен".

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠОРТ САҠҺА...

■ Бал ҡорто ағыуы составындағы мелиттин тип йөрөтөлгән токсин ВИЧ күҙәнәктәрен хәүефһеҙ рәүештә юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә. Был турала АҠШ-ның Медицина мәктәбе университеты белгестәре белдерә. Әлегә ВИЧ-ҡа ҡаршы дарыу уйлап сығарыу тураһында һүҙ бармай. Әгәр ҙә һөҙөмтәләр раҫланһа, вирус менән зарарланыуҙан һаҡлаусы профилактик сара формаһы эшләнәсәк. Хеҙмәттең авторы Джошуа Гуд әйтеүенсә, мелиттин ҡайһы бер вирустарҙы һәм яман шеш күҙәнәктәрен юҡҡа сығара.

■ Физкультура мускулдар өсөн генә түгел, баш мейеһе өсөн дә файҙалы, тип белдерә Иллинойс университеты эксперты Арт Крамер. Әлеге ваҡытта физик күнекмәләрҙең баш мейеһе структураһының критик структура үлсәмен ҙурайтыуға һәм балаларҙың, шулай уҡ ололарҙың когнитив һәләттәрен яҡшыртыуға булышлыҡ итеүен раҫлаған тиҫтәгә яҡын тикшеренеү бар. Кешеләргә үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, даими физик күнекмәләр, мәҫәлән, атлап йөрөү аҡыл һәләттәрен дә үҫтерә. "Спорт медицинаһы" белдереүенсә, ололарҙың мейе структураһы яҡшыра, ул функцияларын әүҙемерәк башҡара. Әйт-кәндәй, көндәлек башҡарған гәҙәти эштәрҙе икенсе ысулдар менән башҡарыу ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә. Мәҫәлән, иртән тештәрегеҙҙе һул ҡул менән таҙартығыҙ, был саҡта һеҙ баш мейеһенә лә "күнекмә" үткәрәһегеҙ.

■ Диетолог Рэчел Беллер белдереүенсә, суши "Биг Мак" һәм фри картуфына ҡарағанда ла калориялы булыуы ихтимал. Гәҙәти суши-ролл 290-350 калорийҙан тора, углевод күләме буйынса ул дүрт телем икмәккә тиң. Диетолог белдереүенсә, был ризыҡтарҙа балыҡ күләме бик аҙ. Медиктар әйтеүенсә, 1 порция балыҡ 140 грамм тартырға тейеш, мәҫәлән, "Калифорния" ролльында ул бары 5 грамм. Тимәк, 1 порция балыҡ килеп сыҡһын өсөн 28 суши ашарға тура киләсәк. Сушиҙың нигеҙен аҡ дөгө алып тора, ул ҡайһы саҡта ризыҡтың 75 процентын тәшкил итә. Оҙайлы эшкәртеү үткәндән һуң, дөгөлә витаминдар һәм минералдар ҙа ҡалмай. Етмәһә, был дөгөнө әҙерләгәндә шәкәр ҡулланыла.

■ Әскелтем тәмле ризыҡтар астма өйәнәген туҡтатыу һәләтенә эйә, тип белдерә Массачусетс университеты (АҠШ) тикшеренеүселәре. Әскелтем тәм тын юлдары күҙәнәктәренең тәм рецепторҙарын әүҙемләштерә, был мускулдарҙы йомшартып, һауаның үтеүенә булышлыҡ итә. Был астма ауырыуынан яңы дарыуҙар эшләүҙә ярҙам итәсәк. Тәм рецепторҙары әсе тәмдә тойғас та, организмға хәүефле, мәҫәлән, әсегән йәки ағыуланған ризыҡ тураһында мәғлүмәт ебәрә. Астма ваҡытында тын юлдарының өҫкө өлөшө күҙәнәктәре артыҡ йыш ҡыҫҡара, был тын алыу менән бәйле проблемаларға килтерә. Ә әсе тәм тойған рецепторҙар күҙәнәктәрҙе йомшартыу һәләтенә эйә.

■ Бөтөн Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге яңы һорау алыу үткәргән һәм рәсәйҙәрҙең үҙ сәләмәтлегенә ниндәй мөнәсәбәттә булыуын асыҡларға тырышҡан. Яуап биреүселәрҙең 84 проценты үҙенең тәненә һаҡсыл ҡарауын белдергән. Һаҡсыл ҡарау, тигәнде нисек аңлайһығыҙ, тигән һорауға уларҙың 38 проценты табипҡа йөрөүҙәре һәм уларҙың кәңәштәрен тотоуҙары, 36 проценты насар гәҙәттәре булмауы, ҡалған бер өлөшө телевизорҙан сәләмәтлек тураһында тапшырыуҙар ҡарауы тураһында белдергән. Яуап биреүселәрҙең дүрттән бер өлөшө йыл һайын диспансерлаштырыу үтә. 22 процент рәсәйле йылына бер тапҡыр булһа ла яҡшы итеп ял итә, ә һәр бишенсе рәсәйле физкультура һәм спорт менән шөғөлләнә. Шул уҡ ваҡытта, дөрөҫ туҡланыуҙы сәләмәт булыуҙың бер сараһы икәнен 25 процент ҡына рәсәйле таныған. 8 процент яуап биреүсе витаминдар һәм биологик аҙыҡ өҫтәмәләре ҡабул итә. 15 процент рәсәйле һаулығы тураһында бөтөнләй хәстәрлек күрмәй. Катын-ҡыҙҙар үҙ сәләмәтлегенә иғтибарлыраҡ, ирҙәр иһә спорт менән йышыраҡ шөғөлләнә.

ХӘТЕРКИТАП

# РЕСПУБЛИКА ИРТӘҺЕ ИРТӘГӘГӘ ИЛТӘ

## (ЭССЕ)

Атайым Миңлеәхмәт, Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды, ғүмере буйына йор һүҙле булды, төрлө заманалар, шул саҡтарҙа йәшәгән кешеләр, тарихи ваҡиғалар хаҡында үтә мауыҡтырғыс итеп һөйләр ине. Өҫтәүенә боронғо башҡорт халыҡ йырҙарын үҙенә генә хас моң менән башҡарыусы булып та танылғайны.

Күптән инде баҡый донъяға күскән ҡан-нәҫелемде иҫләүемдең ғиләһе шунда - уларҙың балалыҡ һәм йәшлек йылдары Совет Рәсәйендә тәүләп барлыҡҡа килгән Башҡорт автономиялы республикаһының тыуыуы һәм үҫеш осорона тура килә, яңы тормоштоң барса әсе-сөсөһөн татып үҫә улар. Бәҙретдин ҡарттайым (беҙҙең һөйләштә шулай) 20-се йылдар уртаһында вафат була, атайыбыҙҙың етемлек яҙмышы уға бала ғына көйөнсә байтаҡ михнәтхәсрәт алып килә. Ә мәзин ҡарттайымды репрессия урап үтмәй, ғаиләһе-ние менән өйөнән ҡыуып сығаралар, ул үҙе сит-ят ерҙәргә ҡасып сығып китә. Әммә тормош дауам итә, колхоздар төҙөлә, атайыбыҙ ауыл хужалығы курстарында умартасы һөнәрен үҙләштереп, колхоз умарталығында эшләй. Шул йылдарҙа йәй һайын тыуған ауылына ялға ҡайтып йөрөгән күренекле халыҡ артисы Ғималетдин Минһажев менән яҡындан таныша. Ул атайымды Өфөгә күсеп китергә димләп ҡарай, филармонияға йырсы итеп урынлаштырырмын, тип вәғәҙә лә бирә. Әммә ауыл егете ризалашмай - йәш ҡатыны, ярым һуҡыр инеһе, аралашып йәшәгән яҡын туғандары, аҙмы-күпме үҙ донъяһы ла бар бит.

Граждандар һуғышы инде күптән йыраҡта ҡалған, әммә шул ҡанлы бәрелеш үә һулға (коммунистик) боролош йылдары тарих биттәрендә генә түгел, сәнғәт һәм әҙәбиәт әҫәрҙәрендә лә, халыҡ хәтерендә лә бик оҙаҡ йылдар йәшәй. Уҙған быуаттың 60-сы йылдары уртаһында йәштәш-класташтарыбыҙ менән революция йырҙарын өйрәнәбеҙ. Хор менән йырлайбыҙ: "Вихри враждебные веют над нами, Темные силы нас злобно гнетут, В бой роковой мы вступили с врагами, Нас еще судьбы безвестные ждут..." Беҙгә ошо йыр бигерәк тә шомло, хатта ҡурҡыныс булып тойолғаны хәтерҙә ҡалған. Шулай ҙа "Смело мы в бой пойдем За власть Советов, И как один умрем В борьбе за это!" тип йырланғаны оҡшаны. Йәнә атайымдың бик тә һағышлы итеп йырлағаны иҫтә ҡалған: "Бар фарман ҡыҙға - көньяҡҡа, Егеткә - көнбайышҡа, Китте шулай комсомолдар Граждандар һуғышына..." Тарихты китап уҡып ҡына түгел, йылға буйҙарында, урман-ҡырҙарҙа йөрөгәндә тапҡан гильзаларҙан, штыктарҙан, наган һөлдәһенән өйрәнәбеҙ. Ололар һөйләгәндәрҙе йотлоғоп тыңлайбыҙ. 112-се Башҡорт атлы дивизияһы составында яуҙарҙың башынан аҙағына тиклем йөрөп ҡайтҡан Тәһир Хужин бабайыбыҙҙы үҫмер генә көйөнсә (ул 1903 йылғы ине) ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа



ылауҙа ат ҡыуыусы итеп йөрөткән, бер ылау менән Златоусҡа тиклем барып еткәс, төнөн ҡасып ҡайтып киткәндәр.

Һирәгерәк булһа ла, беҙҙең Иҙрискә үҙебеҙҙең районды Алағуз ауылынан Гөләмзә ҡәртнәйем килеп йөрөй. 1919 йыл - Башҡортостанда граждандар һуғышының иң ҡыҙған мәле. Тимәк, ул саҡта йәш кенә ҡыҙ булған ҡәртнәйем аҙмы-күпме ошо ваҡиғаларҙың шаһиты булырға тейештер, тип уйлайым. Унан һораштыра башлағас, ул миңә ошо ваҡиғалар хаҡында бына ниҙәр һөйләне: "Иҫемдә, ауылыбыҙҙа тирә-яҡтағы большевиктар һәм активистар сходҡа йыйылғайны. Улар йыйылышҡан өй беҙҙең Ҡыйғы йылғаһының арьяғындағы урамда, өйөбөҙ тәҙрәһенән яҡшы күренә. Бер мәлдә шарт та шорт мылтыҡтарҙан ата башланылар. Мин ҡурҡманым, ни булды икән тип, тәҙрәгә күҙ һалдым. Баҡтиһәң, теге большевик йыйынына килгәндәрҙе фетнәселәр ҡулға алғандар. Тик береһе генә һыбай ҡасып ҡотолдо, уның артынан да атып ҡалдылар. Быларҙы һыңһыҙ итеп туҡмап, бер байҙың келәтенә ябып ҡуйҙылар. Ҡулға алынғандар араһында берҙән-бер урыҫ, большевиктар партияһының Златоуст ҡалаһы комитеты вәкиле Русских та була. Келәттең ҡыйыҡ аҫтында кәртәләр түшәлгән, бахырҡайҙарҙың шул кәртәләргә менеп ятып, тән ҡуна. Урындағы большевик Мырҙакамал Зарипов, иртә менән ишек асылыуға, шундуҡ урамға сыға. Уға бер нисә фетнәсе мылтыҡ тоҫҡай, әммә ул: "Һеҙ беҙҙең барыбыҙҙы ла үлтереп бөтөрә алмаҫһығыҙ! Беҙҙең һәр тамсы ҡаныбыҙҙан меңәрләгән большевик тыуыр!" - тип ҡысҡырып өлгөрә. Ә теге кәртә өҫтөндәгеләрен яткан ерҙәрендә атып үлтерәләр. Һуңынан фетнә баҫтырылды, ойоштороусылары язаға тарттырылды".

Эйе, Ҡыйғы йылғаһының бейек һәм текә ярындағы келәт мин бала саҡта ла бар ине. Олораҡ малайҙарҙың беҙгә келәт стенаһы буйлап һарҡып ағып төшкән ҡан юлаҡтарын күрһәткәнен дә хәтерләйем. Һуғыш бит ул - кеше күңелен ҡатырып, бәғерһеҙгә әйләндерә. Ҡыҙғаныс, беҙҙең төньяҡ-көнсығыш зонала аҡтар менән ҡыҙылдарҙың алыштарында, фетнәләр ваҡытында меңәрләгән кеше һәләк ителә. Революция ҡорбанһыҙ булмай. Әммә аҡтар яғында ла, ҡыҙылдарҙа ла иҙге йөрәклеләр була, улар кеше талауға йә иһә үлтереүгә ҡаршы тора. Гөләмзә ҡәртнәйем һөйләгән тағы бер эпизод ошоға дәлил. Беҙҙең Иҙрис ауылы бер нисә мәртәбә ҡулдан-ҡулға күсә: йә аҡтар баҫып ала, йә ҡыҙылдар килеп инә. Шулай, йәйге бер матур көндә Гөләмзә ҡәртнәйем өйҙәрендә бер үҙе генә ҡалған. Ауылда - Колчак ғәскәре. Бер һалдат, өйгә инеп, эсергә һыу һорай. 18 йәшлек ҡыҙ ҡурҡмай, сүмес менән күнәктән һалҡын һыу алып, һалдатҡа һона. Шул саҡта тегеһе ҡыҙҙың ҡулындағы матур көмөш беләҙекте күреп ҡала һәм талап алырға маташа. Гөләмзә, йәһәт кенә утын ағасын ала һалып, һалдаттың башына тондора. Бер аҙҙан әлеге башы ярылған һалдат командирын алып килә. Аҡ офицер (башҡорттарҙан булһа кәрәк) ҡыҙҙың ни өсөн һалдаттың башына утын ағасы менән һуғыуы хаҡында һораша. Гөләмзә әлеге көмөш беләҙекте күрһәтеп, хәлде аңлатып бирә. Офицер инде үҙе һалдатының яңағына тондора һәм иҫкәртә: "Әгәр тағы ошолай ҡыланһаң, атып үлтерермен!"

Әле бәйән ителгәндәр тәүге Башҡорт Автономиялы Республикаһының ниндәй хәтәр шарттарҙа ойошторолғанына бер дәлил, ә ундай дәлилдәрҙе һәр кемебеҙ килтерә алалыр, тим. Нисек кенә булмаһын, ни барыһы 483 көн ғәмәлдә булған Беренсе Башҡортостан ерле автономияһының арҙаҡлы етәкселәре, башҡорт зыялылары, Әхмәтзәки Вәлидов һәм уның арҡадаштары республикабыҙҙың нигеҙенә һис ҡыйралмаҫ милли идеялар һалған, ә улар Рәсәй федерализмы өсөн бөгөн дә мөһим һәм ҡиммәтле.

Икенсе Башҡорт Республикаһының тыуған көнө - 1919 йылдың 23 марты. 1918 йылдың 18 ноябрендә үҙенә үҙе фактик рәүештә Рәсәй монархы статусын биргән адмирал Колчак илдә бер ниндәй ҙә автономия булмаясағын белдереп, Башҡорт ғәскәрен бөтөрөп, уның яугирҙарын башҡа частарға таратырға бойора. Тап ошо сәбәп арҡа-

*✓ Башҡортостанда башҡорт теле дәүләт теле статусын ала, милли әҙәби тел формалаша, яңы типтағы совет мәктәптәре асыла, барса балаларға башланғыс һәм ете йыллыҡ мәктәптәрҙә бушлай уҡый алыу хоҡуғы бирелә.*



һында Башҡорт Хөкүмәте Совет власы яғына сығырға ҡарар итә. Һөйләшеүҙәр, "Килешеү" пункттарын аныҡлау 1919 йылдың 20 мартына тиклем дауам итә. 1919 йылдың 17 мартында башҡорт халҡының яҡын киләсәге өсөн (әлбиттә, башҡа халыҡтар өсөн дә) үтә әһәмиәтле тарихи документҡа - "Рәсәй Эшсе-Крәҫтиән Хөкүмәтенең Башҡортостан Хөкүмәте менән Башҡорт Совет Автономияһы тураһында Килешеүе", тип атала ул - Үҙәк Совет власы яғынан милләттәр эштәре буйынса нарком Иосиф Сталин, Башҡорт Хөкүмәте вәкилдәренән Мстислав Кулаев, Муллаян Халиҡов һәм Әбдрәшит Бикбаув үҙ имзаларын һала.

1919 йылдың 20 мартында РСФСР Совнаркомы ултырышында "Килешеү"ҙе раҫлау һәм уны Бөтөн Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитетына (ВЦИК) тапшырыу хаҡында ҡарар ҡабул ителә. Шул уҡ ултырышта "Килешеү"гә В.И. Ленин да үҙ имзаһын ҡуя. Шул уҡ көндә "Килешеү" БРҮБК (ВЦИК) тарафынан да раҫлана - ВЦИК председателе вазифаһын башҡарыусы М.Ф. Владимирский һәм ВЦИК секретары А.С. Енукидзе документҡа ҡул ҡуя.

"Килешеү"ҙең тексы 1919 йылдың 23 мартында "Известия ВЦИК" гәзитендә баҫылып сыға һәм закон көсөнә инә. Ҡыҙғаныс, әммә барыһы менән дә тик бер үҙәктән тороп идара итеү принцибын өҫтөнлөклө тип иҫәпләгән большевиктар власы ошо тарихи документты 1 йыл да 2 ай үтеүгә, йәғни 1920 йылдың 19 майында юҡҡа сығара. Тап ошо көндә ВЦИК һәм РСФСР Совнаркомы "Автономиялы Совет Башҡорт Республикаһының Рәсәй Совет Республикаһына мөнәсәбәттәре тураһында" тигән декрет ҡабул итә, уға өҫтәмә рәүештә ВЦИК 1920 йылдың 28 майында "Автономиялы Совет Башҡорт Республикаһының дәүләт төҙөлөшө тураһында" тип аталған ҡарар ҡабул итә. Һөҙөмтәлә республика "Килешеү"ҙә гарантияланған сәйәси һәм иҡтисади хоҡуҡтарын юғалта. Был Совет Хөкүмәтенең үҙәкләштереү сәйәсәте сиктәрендә башҡарыла.

Шулай ҙа ошондай аяуһыҙ сикләнелгән автономия барыбер йәшәүен һәм үҫеүен дауам итә: Үҙәк төбәктәр үҫешен кәрәгенән артыҡ сикләгән хәлдә дөйөм ил үҫешенә лә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килер ине. Хатта кулактарҙы репрессиялау, казактарҙың, руханиҙарҙың, элекке интеллигенция вәкилдәренең, ғалимдарҙың сәйәси хоҡуҡтарын сикләү шарттарында ла ил иҡтисады, сәнәғәт, мәҙәниәт, фән һәм башҡа хужалыҡ өлкәләре үҫештән туҡтамай. Уҙған быуаттың 20-30-сы йылдарында СССР тигән оло ил индустриялаштырыу һәм ауыл хужалығын коллективлаштырыу тип аталған оло юлға сыға һәм барса донъяны ғәжәпләндергән уңыштарға өлгәшә.

1937 йылдан Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы тип атала башлаған Рәсәй субъектында яңы заводтар, фабрикалар төҙөлә, Ишембайҙа девон нефте табыла, Өфөлә нефть эшкәртеү заводынан тәүге Башҡортостан бензины цистерналарҙа бөтөн илгә ебәрелә, яңы ҡасабалар, ҡалалар үҫеп сыға, яңы дауаханалар асыла, урта һәм юғары һөнәри уҡыу йорттарында меңәрләгән студенттар фәндәрҙе өйрәнә, ғәмәли тәжрибә туплай.

Тап ошо йылдарҙа Башҡортостанда башҡорт теле дәүләт теле статусын ала, милли әҙәби тел формалаша, яңы типтағы совет мәктәптәре асыла, барса балаларға башланғыс һәм ете йыллыҡ мәктәптәрҙә бушлай уҡый алыу хоҡуғы бирелә, педагогик кадрҙар әҙерләүгә дәүләт иғтибары бермә-бер арта. Тап ошо ваҡытта башҡорт зыялыларының яңы быуыны формалаша, театр сәнғәте, музыка һәм вокаль сәнғәт, әҙәбиәт һәм шиғриәт яңы үрҙәр яулай: тәүге романдар, бәләкәй проза әҫәрҙәре, поэмалар, лирик шиғырҙар ижад ителә. Татарстанда Һаҙый Таҡташ, Башҡортостанда Ғәлимов Сәләм ижады халыҡтың рухын күтәрә, яңы тормош юлынан ситкә тайпмаҫҡа, тотош республика хеҙмәтенә үҙ өлөшөн әүҙемерәк индерергә өндәй. Шулай итеп, Икенсе Башҡорт Республикаһы 1919 йылдан 1990 йылға тиклем, йәғни 26135 көн дауамында, ил күргәнде күреп, оло һуғыш афәттәрен үтеп, тиҫтәләрсә мең халҡын юғалтып, барыбер алға бара, СССР-ҙың һәм Рәсәйҙең бар яҡтан да өлгө һәм терәк булған субъекттарының береһенә әйләнә.

Өсөнсө Башҡорт Республикаһы - 1990 йылдың 11 октябренән Башҡорт Совет Социалистик Респуликаһы, ә 1992 йылдың февраленән Башҡортостан Республикаһы тип атала башлаған дәүләтебеҙҙең тарихын үҙ күҙҙәребеҙ менән күҙәттек, һәм ошо тарихты үҙебеҙ яҙыштыҡ. Ул әлегә аҙ ҙа түгел, күп тә түгел, теп-теүәл 12413 көнлөк ваҡыт арауығынан хасил. Барыбыҙҙың да үҙ алдына ҡуйған маҡсаттары бар - йәшәргә лә әле йәшәргә беҙгә!

Дөйөм алғанда, халҡыбыҙ бигүк етеш йәшәмәгән йылдарҙа ла киләсәккә өмөтөн һүндермәне, ватандаштарыбыҙҙың күпселеге маҡсатлы тормошҡа ынтылды. Яңы көн таң тыуғас, иртән башлана. Иртүк торабыҙ ҙа, Аллаһыбыҙға шөкөр, бөгөн дә иртәгәбеҙҙе уйлап йәшәргә яҙҙы, тибеҙ. Республикабыҙ Иртәһе ниндәйерәк булған икән тип һораһалар, уны тап Сәләмсә генә тасуирлап булалыр, тимен.

*"Паровоздар киҫеп сыҡҡан ерҙә*
*Урал ҡаялары уртаһын,*
*Ап-аҡ ташҡа баҫып*
*ҡарап торҙом*
*Республикамдың мин иртәһен.*
*Тын күлдәргә төшкән аҡҡошмо ни:*
*Уйһыуҙарҙа ята аҡ томан.*
*Ниндәй йәнле иртә!*
*Бына бер саҡ,*
*Тау биттәрен солғап яҡтыға,*
*Ҡояш сыға башлай, нурҙарына*
*Ем-ем итә Урал таштары.*
*Иртәнге ел, әкрен генә өрөп,*
*Һыйпап үтә үлән баштарын...*
*Күрәм:*
*эшкә тора республикам,*
*Һөрән һалды бына гудоктар.*
*Эшсе өйҙәр*
*ҡояшҡа ҡаратып*
*Тәҙрә асты...*
*Күҙ ташлайым ҡабат:*
*Иҙел буйлап*
*Колхоз ауылдары тартылған.*
*Уяналар өйҙәр,*
*шау-шыу булып,*
*Көтөү сыға әүен артына.*
*Терелделәр юлдар.*
*Автобустар*
*Ҡыҙ һәм егеттәрҙе тейәгән,*
*Баҫыуҙарға бара...*
*Ә арыраҡ,*
*Башаҡ тулҡынланған ҡырҙарҙа*
*Ҡуҙғалдылар баҫыу караптары,*
*Ҡыр күмелә күмәк эш менән".*

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## ЙОҠОНАН ИРТӘ ТОРОУ ӨСӨН УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Кемдер иртә торорға теләһә, йоҡларға ятҡанда ошо һүҙҙәрҙе әйтһен:

**Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим. Ләә тә'хуҙуһу синәтун үә ләә нәум. Аллааһүммә сәһһир ғәйнии үә нәууир ҡалбии үәдфәғ ғәннии кәҫратән-нәүми үә гилҙатәл-гафләһ.**

"Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим! Унын өҫтөнән серемдең дә, йоҡоноң да хакимлығы юҡ. Эй Аллам! Күҙемде ас, йөрәгемде нурың менән яҡтырт. Оҙайлы йоҡонан һәм ауыр ғәмһеҙлектән алыҫлаштыр мине".

## ШИФАЛЫ АЯТТАР

Изге Ҡөрьәндең "шифа" һүҙе булған аяттары:

**Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим. Үә йәшфи судуура ҡаумим-му'миниин. Үә шифәә'үл-лимәә фиссудуур. Йәхруджу мим-бутууниһәә шәраабүм-мухтәлифүн әл'үәәнүһүү фииһи шифәә'үл-линнәәс. Үә нүнәззилү минәл-Ҡур'әәни мәә һүүә шифәә'үү-үә рахмәтүл-лилмү'миниин. Үә иҙәә мәридту фәһүүә йәшфиин. Ҡул һүүә лилләҙиинә әәмәнүү һудәү-үә шифәә'.**

"Әт-Тәүбә" сүрәһе, 14-се аят
"Йунус" сүрәһе, 57-се аят
"Ән-Нәхл" сүрәһе, 69-ся аят
"Әл-Исра" сүрәһе, 82-се аят
"Әш-Шуғара" сүрәһе, 80-се аят
"Фуссыләт" сүрәһе, 44-се аят

## ҺАУЫҠТЫРЫУҘЫ ҺОРАП УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.Бисмилләәһи әрҡиик. Аллааһү йәшфиик. Әҙһибил-бә'сә Раббиннәәси үәшфи әнтәш-шәәфии. Ләә шифәә'ә илләә шифәә'үкә шифәә'ән ләә югаадиру сәҡамәә. Әәмиин. Бирахмәтикә йәә әрхәмәр-раахимиин. Мин күлли шәй'ин ю'ҙиикә үә мин күлли ғәйнин үә хәәсид. Аллааһү йәшфиик.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Ун өсөнсө хат: "Тәрбиәлелек тураһында"

"Үҙ-үҙеңде яҡшы тотош" буйынса китаптар күп. Был китаптар йәмғиәттә, ҡунаҡта йәки өйҙә, театрҙа, эштә, ололар һәм кеселәр менән үҙеңде нисек тоторға, тирә-йүндәгеләрҙе кәмһетмәҫлек итеп нисек һөйләшергә, нисек кейенергә өйрәтә. Әммә кешеләр был китаптарҙан күп һабаҡ алмай, ҡыҙғаныҫҡа күрә. Бының шулай килеп сығыуы, уйлауымса, үҙ-үҙеңде яҡшы тотош тураһындағы китаптарҙа был нимә өсөн кәрәк булыуы һирәк аңлатылыуға бәйле. Шуға ла үҙ-үҙеңде яҡшы тотоу ялған, күңелһеҙ, кәрәкмәгән нәмә кеүек күренә. Кеше ысынлап та насар ҡылыҡтарын яҡшы ғәҙәттәре артына йәшерә ала.

Эйе, яҡшы ғәҙәттәр тышҡы күренеш кенә булыуы ихтимал, әммә дөйөм алғанда улар әллә нисә быуын туплаған тәжрибәнән сыҡҡан һәм кешеләрҙең яҡшыраҡ булырға, уңайлыраҡ һәм матурыраҡ йәшәргә тигән күп быуатлыҡ ынтылышын билдәләй.

Эш нимәлә һуң? Яҡшы ғәҙәттәргә эйә булыу өсөн ҡулланма нигеҙендә нимә ята? Был ябай ғына булһа ла, хәтерҙә ҡалдырыуы ауыр ҡағиҙәләр, үҙ-үҙеңде тотош "рецептары", нәсихәттәр йыйынтығымы?

Бөтә яҡшы ғәҙәттәр нигеҙендә хәстәрлек ята - кеше икенсе кешегә ҡамасау итмәү тураһында, бөтәһе лә бергә үҙен яҡшы тойоу хаҡында хәстәрлек.

Бер-береңә ҡамасауламаҫҡа белергә кәрәк. Шуға шауламаҫҡа кәрәк. Шау-шыуҙан һәр ваҡытта ла ҡолаҡты ҡаплап ҡына арынып булмай. Мәҫәлән, өҫтәл артында ашап ултырғанда. Шунлыҡтан шапылдамаҫҡа, тәрилкәгә вилканы шалтыратып һалмаҫҡа, һурпаны һөрпөлдәтеп эсмәҫкә, ашағанда ҡысҡырып йәки эргәңдәгеләрҙе хәүефләндереп, тулы ауыҙ менән һөйләшмәҫкә кәрәк. Һәм терһәкте лә өҫтәлгә һалмағыҙ - тағы ла күршеңә ҡамасауламаҫ өсөн. Бөхтә кейенергә кәрәк, сөнки был башҡаларға ҡарата ихтирамың билдәһе - ҡунаҡтарға, хужаларға йәки урамдан үтеп барыусыларға: һеҙгә ҡарауы ерәнес булмаҫҡа тейеш. Күршеләрегеҙҙе бөтмәҫ-төкәнмәҫ шаяртыуҙарығыҙ, көләмәстәрегеҙ, бигерәк тә быға тиклем башҡа берәү тарафынан һөйләнгәндәре менән ялҡытырға кәрәкмәй. Бының менән һеҙҙе тыңлаусыларҙы уңайһыҙ хәлгә ҡуяһығыҙ. Үҙегеҙ генә башҡаларҙың күңелен күтәрергә тырышмағыҙ, бүтәндәргә лә ниҙер һөйләргә форсат бирегеҙ. Үҙ-үҙеңде тотош, кейем, атлап йөрөш, бөтә тәртип тыйнаҡ һәм... матур булырға тейеш. Сөнки матурлыҡ бер ҡасан да ялҡытмай. Ул "социаль". Һәм яҡшы тип аталмыш шундай ғәҙәттәрҙә һәр ваҡыт тәрән мәғәнә ята. Яҡшы ғәҙәттәр - ул тик ғәҙәттәр, йәғни, өҫтөн генә нәмә, тип уйламағыҙ. Үҙегеҙҙең ғәҙәттәрегеҙ менән һеҙ асылығыҙҙы сағылдыраһығыҙ. Үҙеңдә ғәҙәттәрҙе генә түгел, ә улар кәүҙәләндергәнде, донъяға: йәмғиәткә, тәбиғәткә, хайуандарға һәм ҡоштарға, тирә-йүндең матурлығына, үҙең йәшәгән ерҙең үткәненә һ.б. ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләргә кәрәк.

Йөҙәрләгән ҡағиҙәне хәтерҙә ҡалдырмаҫҡа, ә тик береһен - башҡаларға ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәттә булыу мөһимлеген иҫтә тоторға кәрәк. Ә инде һеҙҙең ошо белемегеҙ булып, тағы ла саҡ ҡына зирәклегегеҙ ҙә булһа, яҡшы ғәҙәттәр үҙенән-үҙе һеҙҙә барлыҡҡа киләсәк, йәғни, икенсе төрлө әйткәндә, үҙ-үҙеңде яҡшы тотоу тураһында хәтер, теләк һәм уларҙы ҡулланыу оҫталығы киләсәк.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

*✓ Күпме бейек булһа ла, сигенмәһәң - тауға менерһең, күпме ауыр булһа ла, сигенмәһәң - эште еңерһең.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ГИМН ҺӘМ ГЕРБ



**1993 йылдың 12 октябрендә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны һәм Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербы тураһында Закондар ҡабул ителгән.**

Республика дәүләтселегененең төп символдары башҡорт халҡының һәм Башҡортостанда йәшәгән барлыҡ башҡа халыҡ вәкилдәренең ҡәҙерле, уларҙың асылдарын сағылдырған төшөнсәләрҙе һынландыра.

Башҡортостан Дәүләт гербында ҡалҡып килгән ҡояш нурҙарына мансылған милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәлен милли орнаментыбыҙ ҡамап алған, аҫтында Башҡортостандың Дәүләт флагы һәм ҡурай тажы төшөрөлгән. Был турала барыһы ла белә инде. Ә бына республикабыҙҙың Дәүләт гимнының һүҙҙәрен яттан беләһегеҙме? Гимныбыҙ оҙаҡ йылдар тик моң рәүешендә генә яңғыратылып, һуңыраҡ ҡына "теле асылыуы" хаҡында хәбәрҙарһығыҙмы?

Барығыҙҙы ла Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеү уңайынан тәбрикләйбеҙ, ә башваҡкыста республиканың Дәүләт гимны, Дәүләт флагы һәм Дәүләт гербы авторҙарын танырға тәҡдим итәбеҙ.

*Башҡортостан, һин һөйөклө, ғәзиз ер,*
*Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.*
*Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа*
*Тыуған илдең тыныс ал таңы.*

*Дан һиңә, Башҡортостан!*
*Илен һөйгән азат халҡыңа дан!*
*Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә*
*Сәскә ат, Башҡортостан!*

*Башҡортостан, һин хөрмәтле, данлы ил,*
*Еңеү яулап алға бараһың.*
*Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә*
*Һинең ғорур рухлы байрағың.*

*Республикам, йондоҙ булып балҡы һин,*
*Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.*
*Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,*
*Туған телдә тынмаҫ йырыбыҙ!*




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**39-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Синод. Иҡсанов. Наган. Атака. Яҫтыҡ. Вәлитов. Буддист. Армыт. Орсоҡ. Колье. Аид. Ҡашҡа. Осло. Рота. Йоҙаҡ. Лиана. Суҡ. Луганск. Алмас. Ғарипов. Йәрәхәт.

**Вертикаль буйынса:** Бөркөтлө. Абдуллина. Интеграл. Ишәк. Урағай. Автор. Сәсән. Аласа. Нәтижә. Грибоедов. Скудо. Диван. Вәт. Ява. Ҡойҡа. Роза. Ыҫыҡ. Ҡот. Аҫҡыс.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 октябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+

**16 октябрь "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц.). 12+

**17 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+

**18 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+

**20 октябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 октябрь "Долгое-долгое детство"** (М. Кәрим). 16.00 12+

**16 октябрь Премьера! "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим). 11.00 6+

**17 октябрь "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. 12+

**18 октябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+

**"Силсәүит, Алдар һәм Адвокат"** (М. Кәрим), драма. 12+

**19 октябрь "Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 12.00 0+

**20 октябрь Премьера! "Ҡара һыуҙар"** (М. Кәрим), өн аралаш төш. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**17 октябрь "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 18.00 6+

**18 октябрь "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин). 19.00 12+

**19 октябрь "Два кота"** (О. Штырляева). 14.00 0+

**"Винни-пух"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 6+

**20 октябрь "Муха-цокотуха"** (К. Чуковский). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**15 октябрь "Орган королдәре"** концерт. 6+

**18 октябрь** Салауат Мөхәмәтйәровтың концерты. 6+

**19 октябрь "Музыку слушаем вместе",** балалар өсөн интерактив. 11.00 0+

**20 октябрь** Лоренцо ди Белла фортепианола уйнай. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**16 октябрь "Ярлыҡау"** (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев инсц.) балладаһы менән М.Кәрим исемендәге МЙТ сәхнәһендә, 16.00 12+

**19 октябрь "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х. Латипова, С. Латипов), музыкаль комедияһы менән М. Ғафури исемендәге БАДТ сәхнәһендә. 18.00 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**16 октябрь "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+

**17 октябрь "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнәллин), фантасмагория. 12+

**18 октябрь "Йәшлек менән осрашыу"** Р. Сәйфуллиндың ижад кисәһе. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**15 октябрь Премьера! "И тот бессмертен, кто Отечество воспел"**, М. Ю. Лермонтовҡа арналған музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 6+

**18 октябрь Премьера! "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В. Гуркин), комедия. 12+

**19 октябрь Премьера! "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В. Гуркин), комедия. 18.00 12+

**20 октябрь "Долгое-долгое детство"** (М. Кәрим), классиканы бергә уҡыйбыҙ. 12.00 6+

**"Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 18.00 16+

*Беҙ автор менән әүҙем хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Ауыр мәлдәрҙә кешенең ысын асылы күренә. Уларҙың уйҙары һәм ҡылыҡтары аша һуғыштың бөтә аспекттары, шулай уҡ илебеҙҙә уға ҡарата мөнәсәбәт асыла.*

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# БЕРЕНСЕЛӘРҘӘН БУЛЫП...

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры башҡорт театрҙарынан тәүгеләрҙән булып махсус хәрби операция геройҙарына арналған спектакль сәхнәләштерә.**

Башҡорт труппаһының баш режиссеры Рөстәм Хәкимов үҙенең пландары менән уртаҡлашты. Спектакль өҫтөндә эш декабрҙә башлана, премьера 2025 йылдың 20 һәм 21 февралендә көтөлә. Пьеса Мөнир Ҡунафиндың "СВОими глазами" тигән китабындағы очерктарына һәм хикәйәләренә нигеҙләнгән. Әлегә спектакль "Бер ғүмер етмәй икән, йәки Геройҙар дәүере" тип атала. Бында "Хәсән", "Хакер" һәм "Историк" позывнойлы яугирҙар тураһында һүҙ бара. Әҫәр ысын булған хәл-ваҡиғаларға таянып яҙылған. "Беҙ автор менән әүҙем хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Ауыр мәлдәрҙә кешенең ысын асылы күренә. Уларҙың уйҙары һәм ҡылыҡтары аша һуғыштың бөтә аспекттары, шулай уҡ илебеҙҙә һәм ватандаштарыбыҙҙың йөрәгендә уға ҡарата мөнәсәбәт асыла. Хәҙерге квадрокоптерлы һәм технологик һуғышта ҡаһарманлыҡҡа урын бармы? Автор "Кеше ғүмеренең хаҡы ниндәй һәм Тыуған илдең бөйөклөгө ниҙә?" тигән һорауға яуап эҙләй", - тип һөйләне Рөстәм Хәкимов.

# ҺӨЙӨҮ КӨСӨ

**Салауат башҡорт драма театрында 92-се театр миҙгеле "Һөйөү көсө" спектакленең премьераһы менән асылды.**



Спектаклдә башҡорт егетенә ғашиҡ булған немец ҡыҙы Францискеның Сәйфетдин өсөн тыуып үҫкән иле Германияны ташлап китеүе, йәштәргә Рәсәйҙә төрлө һынауҙар аша үтергә тура килеүе хаҡында һүҙ бара. "Спектакль Ишембай районында булған реаль хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән. Премьераның беренсе көнөнә "Һөйөү көсө" пьесаһының төп геройҙары - Сәйфетдин менән Францискеның ейән-ейәнсәрҙәре, бүлә-бүләсәрҙәренең килеүе һәммәһен дә ғәжәпкә ҡалдырҙы. Уларҙың икәүһе алыҫтан - Ҡаҙағстандан һәм Силәбе өлкәһенән килгән. Был тамашаны барыһы ла күҙ йәштәре аша ҡараны, өләсәләрен иҫенә төшөрҙө һәм артистарға рәхмәт белдерҙе", - тип һөйләнеләр театрҙа.

Премьерала пьеса авторы - драматург, Башҡортостан Республикаһының Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Тәнзилә Дәүләтбирҙина ла бар ине. "Бөгөн минең өсөн бик ҡыуанныслы һәм тулҡынландырғыс ваҡиға! Спектаклде ҡарағанда геройҙарым менән бергә ҡайғырҙым, - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты драматург. - Тамашасылар көлдө лә, иланы ла. Режиссер Зиннур Сөләймәновҡа, ижади төркөмгә һәм Салауат театры етәкселегенә ошо спектакль өсөн рәхмәт белдерәм".

Спектакль ике көн аншлаг менән барҙы һәм тамашасыларҙың ыңғай баһаһын алды. Тамаша "Берҙәм Рәсәй" партияһы башлап ебәргән "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты ярҙамында бойомға ашырылды.

# ТЫУҒАН ЕРГӘ ҺӨЙӨҮ

**9 октябрҙә, Республика көнө алдынан, Милли музей "Рәмил Килмәмәтов. Башҡортостан хаҡында һөйөү менән" тигән фотокүргәҙмәне асыу тантанаһына саҡыра.**

Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, проект Рәсәйҙең танылған фоторәссамы һәм мәҙәниәт эшмәкәре Рәмил Килмәмәтовтың (1949-2019) тыуған төйәгенә - Башҡортостанына бағышланған һайланма эштәре коллекцияһы менән таныштыра. Рәмил Килмәмәтов - илебеҙҙең художество фотографияһының иң яҡшы классик традицияларын һаҡлаусы. Уның барлыҡ фотоһүрәттәренә Тыуған ил тойғоһо, тормош гармонияһы, ихласлыҡ һәм эскерһеҙлек, оптимизм хас. "Рәмил Килмәмәтов. Башҡортостан хаҡында һөйөү менән" күргәҙмәһе - һәр кемде йәнә бер тапҡыр күп сәйәхәт иткән, дуҫлыҡтың ҡәҙерен белгән һәм тормошто сикһеҙ яратҡан шәхестең матур фоторәсемдәре донъяһына саҡыра.

Уникаль проект - фоторәссамдарҙың "Башҡортостан. Тәбиғәт. Кеше. Мәҙәниәт" халыҡ-ара акцияһы 28 йылдан ашыу ғәмәлгә ашырылып килде. Унда Рәсәй, Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе, ШОС һәм БРИКС илдәре, ТӨРКСОЙ, Европа һәм Америка ҡитғаһының иң яҡшы фотографтары ҡатнашты. Һәр ваҡыт акцияла ҡатнашҡан илдәрҙә "Традицияларҙы һаҡлаған ер" һәм "Башҡортостан дуҫтар күҙлегенән" фотокүргәҙмәләре ойошторолдо. Улар донъяны республикабыҙ, бәрәкәтле Башҡортостан ерендә йәшәгән халыҡтарҙың мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштыра. 6+

# ПУШКИН КАРТАҺЫ МЕНӘН...

**Башҡортостан "Пушкин картаһы" программаһын ғәмәлгә ашырыу буйынса илдең иң яҡшы ун төбәге иҫәбенә инде һәм премия лауреаты булды.**

Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы "Иң яҡшы төбәк концерт майҙансығы" номинацияһында еңеү яуланы - йыл ярым эсендә унда ошо программа буйынса 80 меңдән ашыу билет һатылған, тип өҫтәне ул. "Программа 2021 йылдың 1 сентябрендә Рәсәй Президенты Владимир Путиндың тәҡдиме менән башланды. Йәштәребеҙ уны хуплап сыҡты. Ошо ваҡыт эсендә 339 237 кеше "Пушкин картаһы"н юллаған, улар 19 032 сараға 3,7 млн билет һатып алған. 2024 йылдың башынан Башҡортостан йәштәре 313,8 миллион һумға 772,7 мең билет алған, ошо күрһәткес буйынса беҙ Волга буйы федераль округында - беренсе, ә Рәсәйҙә өсөнсө урында", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә. Рәсәйҙә "Пушкин картаһы"н 14-22 йәшлектәр алырға мөмкин. Уның иҫәбендә - 5 мең һум, аҡсаны йыл дауамында музейға, театрға, киноға, концертҡа йөрөү өсөн тотонорға була.

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# САПЛЫ БУЛ!

**Сап** "Дан, билдәлелек" тигәнде белдерә. *Мәҫәлән: Хеҙмәт менән сап яулау. Сапҡа лайыҡ булыу.*

**Саплы.** Тамырынан аңлашылыуынса, "Данлы, билдәле" мәғәнәһенә эйә һүҙ. *Саплы замандаш. Саплы ғәмәл.*

**Сапатай.** Диалектҡа хас һүҙ, "әҙәпһеҙ" тигән мәғәнәлә йөрөй. *Сапатай ҡылыҡ. Сапатай хәбәрҙе һөйләмә.*

**Сапсаҡ.** Бер бөтөн ағас киҫәгенән эшләнгән тәпән була. *Тәрән сапсаҡ. Сапсаҡ тулы бал.*

**Сапаҡ.** "Мөләйем, алсаҡ" мәғәнәһендә ҡулланылған һүҙ. *Сапаҡ ҡыҙ. Сапаҡ мөғәмәлә итеү.*

**Сапаҡ телле.** "Йор һүҙле" , "үткер телле" тип һөйләр урынға, "сапаҡ телле" тиеү ҙә тура килә. *Сапаҡ телле сығыш яһаусы.*

**Шулай итеп, көрәшкәндә - сапаҡ йөҙлө, һүҙ тотҡанда сапаҡ телле булайыҡ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭСЕҢ АУЫРТҺА...

## ауыҙың тый

Күпме бейек булһа ла, сигенмәһәң - тауға менерһең, күпме ауыр булһа ла, сигенмәһәң - эште еңерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ярлы ғаиләлә үҫкән егет бай, етеш ғаиләлә үҫкән, белем алған ҡыҙҙы ярата. Ҡыҙ ҙа уны ярата. Ләкин ҡыҙҙың ата-әсәһе уларҙың өйләнешеүенә риза булмай. Ҡыҙыҡай ата-әсә ризалығынан тыш та егет менән бергә булырға әҙер, әммә егет быға юл ҡуймай. Ул үҙенең был ҡыҙға лайыҡлы түгеллеген таный. "Мин сәйәхәткә китәм, - ти егет, - байығас, танылыу яулағас ҡына мин һиңә әйләнеп ҡайтасаҡмын һәм һиңә өйләнәсәкмен..." Ҡыҙыҡай илай башлай, ләкин тәүәккәл һәм ғорур егетте был ҡарарынан һүрелдерә алмай.**

**Ҡыҙ егетен күп йылдар көтә. Был ваҡыт эсендә егет ул ҡәҙәре үк байымаһа ла, кешеләргә бик күп изгелектәр ҡыла һәм киң танылыу яулай. Бына бер ваҡыт уның башына шундай уй килә: "Мин ниңә һөйгәнемдән ҡасам әле? Ул бит минең бәхетем, беҙ бит берберебеҙҙе яратабыҙ. Әгәр ҙә ул мине ошо көйөнсә лә ярата икән, ниңә мин уны көтөргә мәжбүр итәм?" Егет яңынан ҡыҙ эргәһенә әйләнеп ҡайта һәм алдына теҙләнеп, уны көтөп күп йылдарын заяға үткәрергә мәжбүр иткән өсөн ғәфү үтенә. Улар бергә йәшәй башлай. Егет һөйгәне өсөн йәнен бирергә әҙер була, уның һәр күҙ ҡарашын тотоп, һәр теләгән алдан белеп тора. Ҡыҙ оло ҡыуаныс кисерә кисереүгә, тик егеттең ҡылыҡтарында ниҙер етмәгән кеүек тоя...**

**Бына бер ваҡыт егеттең бер танышына уның ярҙамы кәрәк була һәм ул алыҫ юлға сығырға тейеш була. "Һин сәфәргә сығаһыңмы?" тип һорай ҡатыны. "Юҡ, - ти ире, - мин хәҙер һинең эргәңдән бер ҡайҙа ла китмәйәсәкмен. Мин үҙ бәхетемдән ҡасып, оҙаҡ йөрөнөм, ә хәҙер мин һинең эргәңдә генә булырға, бар иғтибарым, хәстәрлегемде һиңә генә бағышларға тейешлегемде аңланым. Миңә һинән башҡа берәү ҙә кәрәкмәй". Был һөйләшеүҙән һуң ҡатындың кәйефе төшә. "Беләһеңме, - ти ул иренә, - беҙ танышҡан ғына мәлдәге теге ғорур һәм тәүәккәл егетте иҫем китеп ярата инем. Мин һине күп йылдар көттөм һәм миңә берәү ҙә кәрәкмәй ине. Эйе, мин һинең - гел генә юғарыға ынтылған, һәр төрлө батырлыҡтарға әҙер булған, кешеләргә ярҙам иткән һәм барыһы ла яратҡан егеттең гел генә эргәмдә булыуын теләнем, һинең менән ғорурландым. Һинең минеке генә икәнеңде белә инем. Әле минең алдымда мохтаждарҙы үҙ ярҙамынан мәхрүм иткән икенсе кеше баҫып тора. Һин үҙгәрҙең. Был - һин түгел..." Был һүҙҙәрҙән һуң йәш ир уйлана һәм бер ҡарарға килеп, тағы ла алыҫ сәйәхәткә юллана. Ә ҡатыны уны көтөп өйҙә ҡала. Ҡатын-ҡыҙ көтөр өсөн, ир-егеттәр эҙләнеү, юлдар гиҙеү өсөн яратылған шул..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24040

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 1767